✓ *Ҡурҡыу тураһында шундай риүәйәт бар: "Ҡайҙа китеп бараһың?" - тип һорай бер саҡ ил гиҙеүсе дәрүиш Чуманан. "Багдадҡа китеп барам. Унда миңә биш мең кешене яҡты донъя менән хушлаштырырға кәрәк", - ти Чума. Бер нисә көндән һуң дәрүиш тағы ла осрата Чуманы һәм уға:"Һин бит биш мең кешене теге донъяға оҙатам, тигәйнең, үҙең илле мең кешене үлтерҙең", - ти. "Юҡ, мин ысынлап та биш мең кешене генә оҙаттым теге донъяға, ҡалғандары минән ҡурҡыштарынан үҙҙәре үлде".*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13 - 19 ИЮЛЬ - (МАЙАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№28 (550)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт теле...**

яратыу һүҙҙәре һөйләү өсөн



6

**Мин халҡыма ышанам,**

шуға ла уға эскерһеҙ хеҙмәт итәм



8-9

**Конкурстың һөҙөмтәһе шул:**

артабан айыҡ быуындар китәсәк

2013 АЙЫК АУЫЛ 2013 ТРЕЗВОЕ СЕЛО

11

**Туҡсаба оранлы шәхес...**

Әхмәтбаҡый хәҙрәт тураһында



12-13

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡытайҙа балаларҙы ҡартайған ата-әсәһен ҡарарға мәжбүр итеү тураһында закон бар. Беҙҙә лә шундай закон ҡабул итеү кәрәкмәйме икән?

***Азамат ТАЖЕТДИНОВ, Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Ҡытай өсөн бындай закон ҡабул итеү бер ҙә ғәжәп түгел, тип әйтер инем, сөнки был ил халҡы айырыуса һуңғы йылдарҙа ҡартайыуға табан йөҙ тота. Мәғлүм булыуынса, ҡытай иҡтисадының юғары темптар менән үсешеүе уның традицион тәртиптәрен ҡаҡшатыуға алып килде. Элек унда бер нисә быуын вәкилдәре бер ғаилә булып йәшәһә, бөгөн бындай ҙур ғаиләләр тарҡалып, бик һирәк күренеш булып ҡалған, тип яҙа Ҡытай буйынса белгестәр. Өлкән йәштәгеләрҙең артыуы, ә балаларҙың, тимәк, йәштәрҙең ҡарттарға ҡарағанда аҙыраҡ булыуы "Бер ғаиләгә - бер бала" тигән рәсми сәйәсәттәренең дә һөҙөмтәһелер инде, күрәһең. Үҙебеҙгә килгәндә, бөтөн ил буйынса әйтә алмайым - төрлө халыҡтар араһында төрлө күренештәр барҙыр, әммә башҡорт халҡында ҡарауһыҙ ҡалған өлкән кешеләрҙе яҙмыш ҡарамағына ташлап ҡуйыу элек-электән ғәҙәттән тыш хәл булған. Балалары таралып бөтөп, ата-әсәһен онотҡан хәлдә лә ундайҙарҙы туғандары, күршеләре ташламай, һәр береһе мөмкин булғанса хәстәрләргә тырыша. Унан һуң, беҙҙә бит өлкән йәштәгеләр дәүләт яҡлауы менән солғап алынған. Әйтәйек, ҡараусыһы булмаған әбейҙе ҡарттар йортона ебәрергә итәләр, ләкин ул теше-тырнағы менән быға ҡаршы: нигеҙен ташлап китКеһе килмәй. Бындай осраҡтарҙа район социаль яҡлау идаралыҡтары, ауыл хакимиәттәре хәлде контролгә ала, әбейҙе ҡарауға социаль хеҙмәткәр тәғәйенләй һ.б. Ә инде балалары булып та ата-әсәһен ҡарамаған осраҡтарҙы, бәхеткә күрә, мин белмәйем. Дөрөсөрәге, бындай осраҡтар һирәкләп булған хәлдә лә ундайҙарға йәмәғәтселек, власть органдары тарафынан тейешле йоғонто яһалалыр, тип уйлайым. Миңә ауылдар буйлап йөрөргә, кешеләр менән осрашып һөйләшергә бик йыш тура килә, шуға ла күреп-белгәнемде әйтәм: беҙҙә оло йәштәге пенсионерҙар, киреһенсә, үҙҙәре ғүмер буйы балаларына ярҙам итеп йәшәй. Һәм бына тигән итеп йәшәйҙәр: көсөнән килгәне мал тота, хәленән килмәгәне ҡош-ҡорт булһа ла үрсетеп, баҡса үҫтереп көн итәләр. Ҡыбырҙашып, үҙҙәренә шөғөл табып, йөрөп ятырға тырышалар, тик ҡарауға мохтажмын, тип, зарланып, меҫкенләнеп ултырмай беҙҙекеләр.

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, халыҡ педагогы:*** Башҡортта халыҡ педагогикаһы нигеҙҙәре, тәрбиә традициялары бик көслө, был ҡаныбыҙға "Урал батыр" эпосы аша изге аманат булараҡ һеңдерелгән. Ә бит уның нигеҙендәололарҙы ололау тигән тәрән фекер ята. Беҙҙең халыҡ педагогикаһы ла тап ана шул әхлаҡ ҡанунына нигеҙләнгән. Дөрөҫ, тормош бит: төрлөһө булалыр, ярҙамға мохтаж ҡарауһыҙ ҡарттар ҙа барҙыр, ләкин ундайҙар әлеге һеҙ әйткән закон ҡабул ителгән хәлдә лә буласаҡ, сөнки закон боҙоусылар һәр саҡ була. Ата-әсәһенә ихтирам, изгелек орлоҡтары кешенең фиғеленә һалынмаған, зиһененә һеңдерелмәгән икән, уларҙы закон ҡабул итеп кенә тәрбиәләү мөмкин булмаған хәл. Мәҫәлән, урманға сыҡһаң, күрәһең: тәбиғәтте, урманыбыҙҙы һаҡлайыҡ, тигән саҡырыуҙар яҙылған плакат-таҡталар ағас һайын тиерлек эленеп тора, ләкин кеше уға иғтибар ҙа итмәй: сүпләйҙәр, ҡырҡалар, һындыралар, янғын сығаралар... Шуның кеүек бит был да.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ШАҒИР ҺҮҘЕ




## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

***Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,***
***Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,***
***Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,***
***Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле!***

***Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,***
***Серле ҡамыш ҡурайыңдай ҡарт, олпат һин,***
***Күпте күргән сәсәнеңдәй, йор, зирәк һин,***
***Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!***

***Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем - тәрәнһең һин,***
***Айға-көнгә тиңләмәйем - гүзәлһең һин,***
***Ҡаяларға тиңләмәйем - бөйөкһөң һин,***
***Эй, хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле!***
***Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,***
***Күп быуаттар һин йырланың яугир юлын,***
***Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,***
***Эй, бәхетле, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!***

***Иң тәү миңә һин өйрәттең Ленин һүҙен,***
***Иң тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,***
***Минең өсөн һин бит йәшәү, бәхет үҙең,***
***Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,***
***Атам теле, әсәм теле - минең телем!***

✓ *Форсаттан файҙаланып, бөтә башҡорт баҫмалары журналистарына ла шундай теләгемде еткерер инем. Гәзит-журналдар ябай халыҡ өсөн сыға. Шуға күрә лә уратып-суратып яҙмағыҙ әйтер һүҙегеҙҙе, күҙгә бәреп әйтегеҙ.*



УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ГӘЗИТКӘ АРНАП...

## йыр яҙҙым

**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Белорет районы һәм ҡалаһының билдәле йәмәғәт эшмәкәре, һәүәҫкәр композитор Мөхәррәм Сәлимов төрлө сараларҙа, халыҡ, балалар менән осрашыуҙарҙа ихлас ҡатнаша. Ҡайҙа ғына йөрөһә лә ҡулынан думбыраһын төшөрмәй, йәш быуынға кәңәштәрен биреп, аҡыллы һүҙен әйтеп йөрөргә тырыша ул. Битараф булмаған 78 йәшлек ветеран "Киске Өфө" гәзите тураһында шуларҙы белдерҙе:**

- Бынан дүрт-биш йыл самаһы элек Өфөлә "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында барған бер сарала "Киске Өфө" гәзитен алдыраһығыҙмы?" тип һорағайнылар. Мин уны "Вечерняяя Уфа" гәзите менән бутап, "Юҡ, алдырмайым, Өфө гәзитен алдырырға ла уйламайым", тип яуап биргәйнем. Миңә "Киске Өфө"нөң "Вечерняя Уфа" гәзите түгеллеген, ә телен, халҡын, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен хөрмәт иткән һәм һанлаған милләтәштәребеҙ өсөн сығарылған бик үҙенсәлекле айырым баҫма булыуын аңлаттылар.

Ошо хаҡта белмәүемә уңайһыҙланыу кисерһәм дә, һөйөнөсөм көслөрәк булды. Шул саҡтан алып гәзиттән айырылғаным юҡ. Ә инде алдырып уҡый башлағас, гәзиттең һәр битендә фәһем, аҡыл бирерлек ҡиммәтле мәҡәләләр сыға икәнен күреп ҡыуандым. Гәзит төрлө йүнәлештә эш алып бара. Һәр мәҡәлә үҙенсә әһәмиәтле, урынлы. Яҡтыртылған һәм күтәрелгән мәсьәләләр күп яҡлы һәм етди. Был гәзит журналистарының тырышлығын, һәр саҡ эҙләнеү өҫтөндә булыуын да күрһәтә. Мәҫәлән, Әхмәр Үтәбайҙың ҡәләме йылдан-йыл шымара, камиллаша һәм был оло маҡтауға лайыҡ. Гәзиттә баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрҙең үҙемә кәрәклеһен ҡырҡып алып, айырым папкаға йыйып барам һәм ҡайһы һанда, нисәнсе биттә сыҡҡанын яҙып ҡуям. Халыҡ араһында йыш йөрөгәс, "Киске Өфө" аша белгәндәремде, уҡығанымды башҡаларға ла еткерергә тырышам.

Гәзиттең 2012 йылдың 45-се һанында Зөлфиә Ханнанованың "Киске Өфө"гә арнап яҙған матур шиғыры баҫылып сыҡҡайны. Бындай ҡобайыр стилендәге әҫәр һис шикһеҙ йыр булып яңғырарға тейеш, тип хәл иттем һәм оҙаҡ та уйлап тормай, уға көй яҙҙым. Йырлағанда *м, н, ң, л* өндәрен рәхәтләнеп, асыҡ итеп йырлап була. Был шиғыр мөнәжәткә тартым, хәҙер был стилдә яҙыусылар һирәк. Йырҙы "Юлдаш" радиоһынан йырлап ишеттерҙем дә инде.

Форсаттан файҙаланып, бөтә башҡорт баҫмалары журналистарына ла шундай теләгемде еткерер инем. Гәзит-журналдар ябай халыҡ өсөн сыға. Шуға күрә лә уратып-суратып яҙмағыҙ әйтер һүҙегеҙҙе, күҙгә бәреп әйтегеҙ. Фекерҙе тос һәм ҡыҫҡа ғына итеп еткергәндә, ул аңлайышлы була. Унан һуң, урыҫса фекер йөрөтөп, башҡортса яҙыусылар күбәйҙе, уларҙың фекеренең осона сығып булмай. Тел ағышын, матур яңғыраштны ла боҙа бит улар.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Ҡытайҙа балаларҙы ҡартайған ата-әсәһен ҡарарға мәжбүр итеү тураһында закон бар. Беҙҙә лә шундай закон ҡабул итеү кәрәкмәйме икән?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәүҙиға БАЙМӨХӘМӘТОВА, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауыл хакимиәте башлығы:*** Изгеләрҙән-изге, ғәзиздәрҙән-ғәзиз ата-әсәнде ҡарау, тимәк, хөрмәтләү, уларҙы яраттырыу өсөн закон ҡабул итеп буламы ни?! Ниндәйен дә хурлыҡ булыр ине ул милләт йөҙөнә. Әлбиттә, мин ҡытайҙарҙы хурларға йыйынмайым, уларҙа менталитет та, социаль-иҡтисади шарттар ҙа бөтөнләй икенсе хәҙер, тик барыбер бындай хәлгә аҡланыу табыуы ҡыйын. Бындай закон ҡабул итеү - ул йәмғиәтте йәмғиәт итеп тотоусы әхлаҡи нигеҙҙәрҙең ҡаҡшауын ғына түгел, ә юҡҡа сығыуын таныу менән бәрәбәр, тигән фекерҙәмен. Башҡа халыҡтар тураһында әйтә алмайым, әммә беҙҙең милли ғаилә институты борондан килгән яҙылмаған закон - халыҡ педагогикаһы нигеҙҙәренә таянып йәшәй, шунан аҡыл-һабаҡ ала. Ни сәсһәң, шуны урырһың, тип белмәй әйтмәгән халҡыбыҙ. Быныһы тәрбиә мәсьәләләренә ҡағылһа, "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул була" тигәне лә бар мәҡәлдең. Быныһы инде ата-әсәнең шәхси өлгөһө, тәртип-ҡылыҡтары, тәбиғәте, йәшәү рәүешенә туранан-тура бәйле. Юғиһә, "Атай, кәритәне ташлама, ҡартайһаң, мин һине ырғытыр өсөн нимәгә ултыртып алып килермен," тигән һүҙҙәр менән тамамланған бөтәбеҙгә лә яҡшы билдәле риүәйәттәгесә килеп сығыуы ла ихтимал бит... Ғаиләлә өлкәндәргә ҡарата ниндәй ҡараш - балалар ҙа киләсәктә шуны уҡ ҡабатлаясаҡ, ошо хәҡиҡәтте һәр ата-әсә хәтерендә тотһон ине, сөнки иртәгә улар үҙҙәре лә ҡартаясаҡ бит. Аллаға шөкөр, ауылыбыҙҙа ололар күп, ләкин ҡараусыһыҙ ҡалып, ярҙамға мохтаж миктәгән, онотолған кешеләр юҡ. Ауыл халҡы бер-беренә кеселекле, ярҙамсыл. Ҡалаларҙа, бәлки, хәлдәр башҡасараҡтыр, ләкин ауыл ере өсөн әлеге халыҡ тәрбиәһе традициялары һаҡланып килә һәм киләсәктә лә шулай булыр, тип өмөт итәм.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Быйылғы йылдың икенсе яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу тамамланды ла, июлдән ул яңынан башланды. Йәғни август аҙағына тиклем уҡыусыларыбыҙға 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн 2013 йылғы хаҡтар менән, йәғни 378 һум 36 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Сентябрҙән хаҡтар үҙгәрәсәк.**

• Шулай итеп, июль айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• **Әйткәндәй**, 2013 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға әле лә һуң түгел: 17 июлгә тиклем яҙылһағыҙ - августан, 17 августа тиклем яҙылһағыҙ, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башларһығыҙ.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Әбйәлил районынан гәзит уҡыусыларыбыҙ.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Кореяның университет белеме буйынса Советы генераль директоры Дэ Джун Хван Башҡортостанға килде. Уның сәфәренең маҡсаты - дистанцион белем биреү системаһы менән танышыу. Ул М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында булды.

✓ Башҡортостан Президенты РФ Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев уҙғарған быйылғы урып-йыйыу эштәренә арналған кәңәшмәлә ҡатнашты. Уңыш йыйыу менән хәл былтырғы менән сағыштырғанда насар түгел, тип билдәләнде. Тик илдең Европа өлөшөндә аномаль эҫелек тороуы эшкә ҡамасаулай. 13 төбәк короллоктан зыян күргән. Башҡортостанда ла сәсеүлектәрҙең дүрттән бер өлөшөндә уңыш юҡҡа сыҡҡан, шуға ла планлаштырылған 3 млн тонна урынына 2,2 млн тонна тирәһе генә ашлыҡ йыйылыр, тип көтөлә.

✓ Мәскәүҙә Рәсәй халыҡтары ассамблеяһының 15 йыллығына арналған XIII Рәсәй халыҡтары конгресы булып үтте. Унда Башҡортостан исеменән Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы рәйесе Әхәт Мостафин, Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры Велмир Аҙнаев, республика Президенты Хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси идаралығы начальнигы урынбаҫары Ришат Сабитов ҡатнашты. Улар билдәләүенсә, был форум Рәсәйҙә Милли дәүләт сәйәсәте стратегияһын тормошҡа ашырыуға конструктив башланғыс һалды.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия буйынса комиссия документтар ҡабул итә башлауы тураһында белдерҙе. Положениеға ярашлы, премия журналистарҙың 2012 йылдың сентябренән 2013 йылдың августына тиклем баҫылған материалдары өсөн бирелә. Документтар һәм материалдар 1 сентябргә тиклем Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы исемендәге урамдың 13 йортонда урынлашҡан Журналистар союзында ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: (факс): (347) 276-42-66.

✓ Владимир Путин "Рәсәй Федерацияһында граждандарҙың мөрәжәғәттәрен ҡарау тәртибе тураһында"ғы Федераль законның 11-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль законға ҡул ҡуйҙы. Закон ҡабатлап ебәрелгән һәм аноним мөрәжәғәттәрҙе ҡарау тәртибенә бәйле норманы камиллаштыра. Бынан ары адресһыҙ һәм исем-шәрифһеҙ хаттар аноним тип табыла һәм ундай хаттарға яуап бирелмәй, сөнки мәғлүмәт булмау сәбәпле, яуапты адресатҡа еткереү мөмкинлеге юҡ.

УЙЛЫҒА - УЙ

**Тағы бер уҡыу йылы тамамланды, уҡыусылар гөр килешеп Берҙәм дәүләт имтихандары тапшырҙы. Әммә ниңәлер күңелдә мәктәпте тамамлаусылар менән бергә ҡыуаныу, ҡәнәғәтлек тойғолары юҡ. Әтнәкәһе шундалыр: белем биреү системаһындағы һынауҙар, имтихандар ҙа оло бер алдашыу, мутлашыу, хәйләләү, күҙ буяу сараһына әүерелә бара бит.**

# ДОНЪЯ- ҠУЛАСА,

## әйләнеп тә бер баҫмаҫ, тимә...




Быйыл да интернеттағы мәғлүмәт уғрылыҡтарынан тотош ил шау-гөр килеп торҙо. Аптырайһы, ғәжәпләнәһе түгел, социализм ҡоролошонан тамам ваз кисеп, 20 йылдан ашыу баҙар шарттарында йәшәп ятабыҙ ни тиһәң дә. Ошо бер быуын ир етмәле арауыҡта матурлыҡ, әхлаҡ, ғәҙеллек, әҙәп, миһырбанлыҡ төшөнсәләре онотола, көн дә ҡылыр ғәмәлгә әле атап үтелгән хилафлыҡтар ҙа үтеп инә, ә шундай юғары кимәлгә һәм дәрәжәгә күтәрелгән аҡса көндән-көн әҙәм балаһының йәшәү мәғәнәһенә әүерелә барып, уның былай ҙа тар, былай ҙа сикләнгән аңын биләй. Яңы ҡоролош тәбиғи һайланыш һөҙөмтәһендә йәмғиәтте ҡап урталай бүлеп, "баҙарсы" рухлы кешеләрҙе әүәләй һәм йылғырҙарын саманан тыш байға, ҡотһоҙҙарын үтә ярлыға айыра. Май кикергән, елкәһе ҡалын, әрһеҙ һәм һәр ваҡыт "хаҡлы" оятһыҙҙар болһоҙ, хәләл көсөнә ышанып һәм таянып көн иткән фәҡирҙәрҙе әҙәмгә лә һанамай хәҙер. Ҡырағай баҙар тыуҙырған йәшәү шарттарын беҙ, өлкән быуын вәкилдәре, аңлап, аңғарып етмәһәк тә, йәш-елкенсәк күптән һиҙеп, ҡулланыуға алып, ошо төшөнсәләрҙән сығып эш итә.

Бөгөн мәктәптәрҙә эшләүе шул тиклем дә ауыр һәм ҡатмарлы. Иң йәнгә тейгәне - балаларға ҡайһылайыраҡ итеп тәрбиә бирергә белмәй аптырана замана уҡытыусыһы, сөнки мәктәп менән ысынбарлыҡ көн менән төн, аҡ менән ҡара, яҡшы менән яман ише, бер һүҙ менән әйткәндә, юғары әхлаҡ төшөнсәләренең бөләңгерт урам ҡанундарына шыпа ла тап килмәй. Эш хаҡы түбәнлектән түгел, әүернәгә әүерелеүҙән ҡасҡандар киләсәк яҙмыштарын мәктәп менән бәйләргә ашығып бармай, ә йәштәр урам сатында ҡытай аламаһы һатып көн итә. Хыял-ынтылыштары ла аңлашыла: былай йәшәү күпкә мәшәҡәтһеҙ һәм төшөмлө. Быны шуның өсөн дә бөгөнгө мәктәптәр генә түгел, унда эшләгән уҡытыусылар ҙа ҡартая. Былай барыш менән барылһа, тиҙҙән мәктәптә эшләүсе лә ҡалмаясаҡ. Нисек кенә ауыр булмаһын, совет мәктәбендә белем алған уҡытыусылар уҡыусылары күңеленә яҡшы сифаттарҙы һеңдерергә тырыша, алдарға, урларға, мутлашырға, көсһөҙҙәрҙе, мөсһөҙҙәрҙе рәнйетергә ярамай, ти. Тәрбиәләнеүсеһен аҡыллы, белемле, кешелекле итергә ынтыла. Күп быуаттар ағышында бына ошолай тәрбиәләгәндәр, улар ҡаҡшамаҫ мәңгелек ҡиммәттәр, тип атала. Ошо ҡиммәттәр Ҡөрьән Кәримдә лә, Библияла ла, "Коммунизм төҙөүсенең әхлаҡ кодексы"нда ла урын тапҡан. Һуңғыһы һәр мәктәптең иң түрендә эленеп тора торғайны. Бәлки, беҙ уны көн һайын уҡымағанбыҙҙыр ҙа, хатта ҡайһы ваҡыт иғтибар ҙа итмәгәнбеҙҙер, иллә мәгәр ул түрҙә, түрҙә генә түгел, беҙҙең күҙ алдында ине. Йәмғиәт ҡоролошо, унда барған үҙ-ара мөнәсәбәттәр йыйылмаһы үҙгәрһә лә, мәңгелек ҡиммәттәрҙән айырылыу мөмкин булмаған эш, һуң ҡайһы ғына уҡытыусы урла, тала, алдаш, ҡыр, емер, яндыр, үлтер тип уҡытһын инде. Уҡытыусы тештәрен ҡыҫып, ошоларҙың киреһен иҫбатларға мәжбүр...

Һәм һуңғы финиш һыҙығы - оло алдауға ҡоролған Берҙәм дәүләт имтихандары. Ун бер йыл буйы уҡытыуҙың, тәрбиәнең бөгөнгө ҡырыҫ ысынбарлыҡҡа тап килмәүе ошо ерҙә күренә, асыҡлана ла инде - мәктәптә бер төрлө ҡағиҙәләр, ә урам тәртиптәре ҡурҡыныс һәм аяуһыҙ. Ошо, тотош мир менән алдашыуҙа уҡыусы ла, ата-әсә лә, теге, алдашырға, урларға ярамай, тип тәрбиәләп маташҡан уҡытыусы ла туранан-тура ҡатнаша, сөнки тәүгеләренә нисек тә булһа юғары уҡыу йортона инергә, ә һуңғыһына дирекция, мәғариф бүлеге алдында шыма күрһәткестәр менән отчет бирергә кәрәк. Хаҡтар күптән билдәле, ошо эш менән махсус шөғөлләнеүселәр ҙә етерлек (Быныһы инде белемендә тауарға әйләндереп һатыу тип атала). Аҡсанды ғына йәлләмә, бөтәһе лә һәйбәт буласаҡ...

Яңыраҡ ҡына бер танышым менән гәпләшеп торҙом, быйыл уның ҡыҙы мәктәпте тамамлаған икән. Балаһы БДИны... 200 мең һумға бик тә уңышлы тапшырған, һәр фәндән 100-гә яҡын баллдар йыйған. Ундай күрһәткестәр менән теләһә ниндәй уҡыу йортоноң ишеген тибеп асып инергә мөмкин. Был тиклем дә күп аҡсаны тотоп ҡарамағас, иҫем-аҡылым китеп аптыраным. Ә танышым был сығымын сығарып һалыуын бик тә ябай, аңлайышлы итеп төшөндөрҙө: ҡыҙы барырға йыйынған уҡыу йортоноң коммерция бүлегендә уҡыу өсөн йылына 120 мең талап итепә. Бик тә ябай арифметика: танышымдың ҡыҙы юғары баллдар менән бюджет бүлегенә инә. Ә ул уҡыу йортонда зачет-сессиялар мәлендә алдашыуҙар, ришүәт алыуҙар булмаясаҡ, тип кем әйтә ала? Был атай ул түләүҙәргә лә әҙер, балаһы уҡыһын ғына, дипломлы ғына була күрһен. Замананың тағы ла бер ҡануны аңыбыҙға һеңешә бара шул - белем мөһим түгел, "ҡатырға", йәғни диплом мөһим. Аҡсаң бар икән, бөтөнләй уҡымаҫҡа, аяҡ күтәреп, түбәгә төкөрөп ятырға ла мөмкин, дипломдың ҡыҙыл төҫлөһөн, таҫмаға төрөлгәнен өйөңә үк индереп тапшырып сығасаҡтар. Капитализм ҡоролошоноң иң беренсе ҡағиҙәһе - бөтә нәмәне һатырға һәм һатып алырға мөмкин!

Мәктәпте тамамлағас, уҡыу йортона ингәндә химия фәненән имтихан тапшырған мәлем бөгөнгөләй хәтерҙә. Имтиханды рус ҡатыны ала ине. Мин, русса икмәк-тоҙлоҡ кимәлендә генә һупалаусы ауыл балаһы, ҡайһылайтып ҡына яуап бирермен инде, тип шөрләп ултырам. Билет алғас, бик оҙаҡ мөштөрҙәнем шикелле, уҡытыусы мине янына саҡырып алды ла тәҡдим итте: "Әйҙәгеҙ, мин химик элементтарҙы атайым, ә һеҙ яҙып күрһәтегеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мин башҡортса аңламайым, күреүемсә, һеҙ ҙә русса насар аралашаһығыҙ шикелле. Ике телдә лә һөйләргә тырышығыҙ, моғайын да, бер нәмә килеп сығыр... " Иң аҙаҡтан ул минең ҡағыҙыма ҙур итеп бишле ҡуйҙы: "Күҙҙәрегеҙҙән күрәм, һеҙ химияны яҡшы беләһегеҙ!" Ҡайһылай матур, кешелекле осорҙа йәшәгәнбеҙ икән дә баһа! Телебеҙ ҙә һанланған, кеҫә йоҡа булыуы ла иҫәпкә алынмаған. Ә хәҙер... Аҡсаға табыныу телендә лә, рухыңды ла һанламай, ул йоғошло сир менән бер, таралғандан тарала бара, дауаһы ғына юҡ. Ҡасанға саҡлы дауам итер был сир, нимә менән барып осланыр, йәмғиәтебеҙ бөтөнләй аяҡ һуҙып ҡуймаһа ярай ҙа...

Тағы ла хәтирәләргә бирелмәй хәлем юҡ. Бер ғаиләлә һикһән йәштән үткән ҡарсыҡ ишек алдындағы аласыҡта ғүмеренең һуңғы йылдарын үткәрҙе. Ҡыҙы, кейәүе, ейәнейәнсәрҙәре - хан һарайындай өйҙә, ә ул - насар яғылған, ярым ҡараңғы бер өҡәлтәктә көн күрҙе. Беҙ, балалар, ҡулыбыҙҙағы икмәк һыныған ҡыҙы күрмәгәндә теге әбейгә илтә торғайныҡ. Шулай ҡараүһыҙ ятып, фанилыҡтан китте ҡарсыҡ. Бер ҡайтҡанымда һүҙ араһында теге ҡарсыҡтың ҡыҙы хаҡында белештем. Ул да олоғайып киткән икән һәм уны ла саф һауаны еҫләндереп ятмаһын өсөн теге ергә һеңешкән аласыҡҡа күсергәндәр...

Юҡҡа ғына килтермәнем был миҫалды. Мин ысынлап та олоғайырға ҡурҡам, ағайэне, сөнки ошо алдап, ялғанлап, этеп-төртөп белем алғандар беҙҙең урынға ултырасаҡ бит бер килеп. Беҙҙе урамда, магазиндарҙа, йәмәғәт урындарында алдаясаҡтар, талаясаҡтар, пенсиябыҙҙы ваҡытында бирмәй йонсотасаҡтар, тилмертәсәктәр, тинтерәтәсәктәр. Дауаханаға барһаҡ, аҡса түләп уҡыған оңҡот табиптар ҡабул итәсәк һәм яңылыш дауалап харап итәсәк һәммәбеҙҙе. Алдыҡ көнитмеш тыуҙырған ялған ҡанундарҙың асы емештәрен иртәме-һуңмы бер килеп татыясаҡбыҙ әле. Донъя- ҡуласа, йәмәғәт, ни сәсһәң, шуны ураһың инде ул. Алдыҡтан күңелдәре ҡатҡан, оятһыҙ бурлыҡты күрә һәм кисерә барып, мәрхәмәтһеҙгә әүерелгән йәштәр ҡырыҫ, миһырбанһыҙ, "кеше кешегә - бүре" принцибына ҡоролған үҙ-ара мөнәсәбәтте күреп үҫә һәм улар оло быуынды теләһә ниндәй мәлдә һалҡын, ҡараңғы аласыҡҡа сығарып ырғытырға әҙер һымаҡ. Әллә мин дөрөҫ уйламайыммы - әйҙәгеҙ, фекерләшәйек.

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, яҙыусы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Башҡортостан" дәүләт телерадиокоманияһы Волгоградта уҙғарылған "Мәңгелек ут" VII Халыҡ-ара телепрограммалар һәм телефильмдар фестиваленең I дәрәжә дипломын яуланы. "Һуңғы ҡыуғынсы" документаль очерҡы "Иң яҡшы хәрби-патриотик программа" номинацияһында жюри ағзаларының иң юғары баһаһын алды. Фильм 2012 йылда төшөрөлгән. Уның авторы һәм режиссеры - билдәле тележурналист Луиза Фархшатова.

✓"Берҙәм Рәсәй"партияһының төбәк башҡарма комитетында үткән түңәрәк ҡорҙа Өфөнөң тарихи урындарын һаҡлау тураһында һүҙ барҙы. Билдәләнеүенсә, көндән-көн үҫә, яңыра барған баш ҡалала йыш ҡына ҡомартҡы биналар зыян күрә. Күптән түгел Яңы күпер урамындағы 1890 йылда төҙөлгән һәм уникаль ҡомартҡы булған Дашковтар йорто емертелгән. Түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар Октябрь революцияһы урамында йәйәүлеләр урамы булдырыу, шулай уҡ ҡайһы бер тарихи ҡомартҡы объекттарын һаҡлауҙы шәхси кешеләргә тапшырыу мәсьәләһе тураһында ла фекер алышты.

✓8 сентябрҙә үтәсәк һайлауҙарҙа 602 кандидат күрһәтелде, тип хәбәр итәләр БР Үҙәк һайлау комиссияһынан. Уларҙың 179-ы -БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға, 423-ө - муниципаль берләшмәләр Советына. Кандидаттарҙан документтар ҡабул итеү 21 июлдә тамамлана.

✓Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге сираттағы тапҡыр һорау алыуҙар үткәреп, рәсәйҙәрҙең иртәгәһе көнгә ышанысы кимәлен өйрәнгән. Яуаптарҙан күренеүенсә, иртәгәһе көнгә ышаныс белдергән кешеләр бер йылда 44 проценттан 48 процентҡаса артҡан. Бындай оптимизм бигерәк тә Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербург ҡалаларында йәшәүселәргә һәм 18-24 йәшлек кешеләргә хас. Рәсәйҙәр шулай уҡ аҡрынлап булһа ла тормошон планлаштырырға өйрәнә. Әммә планлаштырыу алыҫ киләсәккә түгел, башлыса яҡын көндәргә генә ҡағыла. Алыҫ киләсәк тураһында нигеҙҙә 18-24 йәшлектәр уйлай.

✓Республика субсидиялар үҙәге үҙ хеҙмәттәренең эш графигын граждандар өсөн уңайлыраҡ итеп үҙгәртте. Дүшәмбелә белгестәр халыҡты иртәнге 8-ҙән 20 сәғәткә тиклем, башҡа көндәрҙә иртәнге 8.30-ҙан 17.30 сәғәткә тиклем, ә шәмбелә 9-ҙан 13 сәғәткә тиклем ҡабул итәсәк.

**"Башинформ"дан.**

*ХОҠУҒЫҢДЫ БЕЛ!*

# Ә ҺИН СУБСИДИЯ АЛДЫҢМЫ?

**Гәзитебеҙҙең үткән һанында торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә хаҡ артыу сәбәпле, Башҡортостан Республикаһы Президенты һәм Хөкүмәтенең граждандарға адреслы социаль түләүҙәр булдырыуы хаҡында ентекләп яҙғайныҡ инде.**

Әммә социаль ярҙам бының менән генә бөтмәй әле. Килеме аҙ булған ғаиләләр даими теркәлеүе буйынса алты айға субсидия алырға хоҡуҡлы. Статистика күрһәтеүенсә, уның күләме ҡулланған хеҙмәттәрҙең (квартплата) 50 процентын тәшкил итә. Субсидия иҫәбенә торлаҡ бинаны тотоу, газ (шул иҫәптән баллондарҙа), йылытыу (торлаҡ мейес менән йылытыла икән - утын йәки ташкүмер өсөн), электр энергияһы, һыу менән тәьмин итеү өсөн тотонолған сығымдарҙың ниндәйҙер күләмен кире ҡайтарып алырға мөмкин. Субсидия граждандарға торлаҡ бина, коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәргә киткән сығым ғаиләнең дөйөм килеменең 20 процентынан артып киткән осраҡта ғына бирелә.

**Түләүҙәрҙе алыу өсөн түбәндәге документтарҙы тапшырырға кәрәк:**

- Барлыҡ ғаилә ағзаларының паспорттарының һәм балаларҙың тыуыу тураһындағы таныҡлығының күсермәләре;
- Торлаҡ менән файҙаланыуға хоҡуҡ биреүсе документтың күсермәһе;
- Ғаилә составы тураһында справка;
- Һуңғы алты ай өсөн барлыҡ ғаилә ағзаларының килеме тураһында справка;
- Бер айҙа торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү тураһындағы документтар;
- Ғариза биреүсенең (фатирҙы ҡуртымға алыусының йәки торлаҡ бинаһы милексеһенең) һаҡлыҡ кенәгәһе.

Әммә, миҙал ике яҡлы була, тигәндәй, мәсьәләнең бер генә әтнәкәһе бар: кире ҡайтарып алынырға тейешле сумма 50 процентты тәшкил итә, тиелһә лә, ғәмәлдә, субсидия юллаусылар белдереүенсә, түләүҙәр ни бары 30-50 һум ғына килеп сыға икән. Юл хаҡы ҡаплана инде былай, ә документтар юллап йөрөүҙәр, унда киткән ваҡыт, сиратта тороуҙар, тейешле хеҙмәттәрҙе күрһәтеүселәрҙең тәкәббер мөнәсәбәте... Шуларҙы уйлай китһәң, субсидия тигән яңғырауыҡлы исем артына йәшеренгән дәүләт "хәйерен" юллап тороу кәрәкмә икән, тип тә уйланыла...

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# БЕР УРЫНҒА - 95 КЕШЕ



**Юғары уҡыу йорттарына инеү буйынса кампанияның иң ҡыҙыу мәле. Кисәге уҡыусылар ата-әсәләре менән Өфө университеттарының ҡабул итеү комиссияларын яулай.**

Бирелгән ғаризалар һаны буйынса быйыл Өфө дәүләт авиация техник университеты иң беренсе урында килә. Был вуз абитуриенттарының күпселеге киләсәктә иҡтисад һәм идара итеү өлкәһендә эшләргә хыяллана. "Иҡтисад" һөнәре буйынса конкурсҡа бында бер урынға 95 кеше тура килә. Өс лидер иҫәбендә тағы ла - менеджмент (82 кеше) һәм муниципаль идаралыҡ (75 кеше). Бындай хәлдә белгестәр документ ҡабул итеү өсөн кәрәкле булған балдың башҡа вуздарҙағына ҡарағанда кәмерәк булыуы менән аңлата.

Ә бына Өфө дәүләт нефть техник университетында конкурс күпкә түбәнерәк."Технологик процестарҙы һәм етештереүҙе автоматлаштырыу" һөнәре быйыл да популяр булып ҡала (9 бюджет урынға 200-ҙән ашыу ғариза бирелгән). Иҡтисад факультетына ла ихтыяж ҙур: бер урынға - 20 кеше.

БДУ абитуриенттарының күпселеге физика-техник институты, инженер факультеты, математика һәм мәғлүмәт технологиялары факультеты студенттары булырға теләй. Бюджет урындарҙың аҙ булыуы арҡаһында бик юғары күтәрелгән конкурс гуманитар факультеттар һәм һөнәр төркөмдәрендә күҙәтелә: "социология"(бер урынға - 16 кеше), "иҡтисад" (11), "сифат менән идара итеү" (9 кеше).

М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педуниверситетына инергә теләүселәрҙең дә күпселеге "иҡтисад һәм идара итеү" (12 кеше), "хоҡуҡ һәм хоҡуҡ һаҡлау эшмәкәрлеге" (11 кеше) һәм "лингвистика" (10) һөнәрҙәрен үҙләштереү хыялы менән яна.

Башҡорт дәүләт аграр университетының иҡтисадсы һәм идара итеүселәр дипломы хаҡында ошо уҡыу йортона ғариза биргән 4,5 мең абитуриенттың 600-ө, ә менеджмент һөнәренә 500-ҙән ашыуы хыял итә.

Башҡорт дәүләт медицина университетының ҡабул итеү комиссияһына 3 580 ғариза яҙылған. Бында иң популяр специальность - "фармация" (бер урынға - 27 кеше) һәм "стоматология" (20). Сағыштырығыҙ: дауалау факультетында бер урынға ни бары 4 кеше.

### Ситкә лә китәләр

Башҡортостан мәктәптәрен тамамлаусыларҙың күпмеһе быйыл сит төбәктәр вуздарына документтарын бирәсәк - әлегә билдәһеҙ. Һуңғы йылдар күрһәткестәре буйынса был һан - 4-5 мең самаһы. Абитуриенттарҙың 13 проценты Мәскәүгә тура килһә, 12 проценты Санкт-Петербургҡа юллана. Кисәге мәктәп уҡыусыларының өстән бер өлөшө тип әйтерлек Волга буйы федераль округы вуздарын һайлаһа, 40 проценты Урал федераль округы вуздарына китә.

### Хаҡтар ни хаҡ?

Юғары белем алыуға хаҡтар ил буйынса былтыр уҡ юғары үрмәләне. Властар бюджет урындар булған специальность төрҙәренә минималь сик билдәләргәйне - көндөҙгө уҡыу төрө йылына 60 меңдән дә ҡиммәтерәк тормай. Шуға күрә бюджет урындар бөтөнләй ҡаралмаған һөнәр төрҙәренә уҡыу арзанараҡҡа төшә. Мәсәлән, БДУ-ның филология факультетында - "нәшриәт", идара итеү һәм эшҡыуарлыҡ хәүефһеҙлеге институтында "сауҙа эше" һәм "төбәктәрҙе өйрәнеү" кеүек бүлектәр бар. Унда уҡыу өсөн йылына 45 мең түләргә кәрәк. Дәүләт өсөн өҫтөнлөклө йүнәлештәр булған "наноэлектроника" һәм "биотехнология" йүнәлешендә студент булыу йылына 112 меңгә төшәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТӨНГӨ ТАУЫШ...

## ҡиммәткә төшәсәк

**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары һуңғы ултырышта Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа төҙәтеүҙәр ҡабул итте.**

Төҙәтеүҙәргә ярашлы, хәҙер үҙ өйөндә, дөйөм ятаҡтарҙа һәм ҡунаҡханаларҙа ҡысҡыртып музыка тыңлау тыйыла. Бында һүҙ стена аша күршеләре булмаған шәхси сектор түгел, ә күп фатирлы йорттар хаҡында бара. Закон көсөнә инеү менән шәп яңғыраған музыка һөйөүселәргә - 2-3 мең, ә ҡабаттан хоҡуҡ боҙоусыларға 3-5 меңгә тиклем штраф һалыу ҡарала. Ғаилә тантаналары үткәреүселәргә был ҡағылмай - уларҙан штраф түләтелмәйәсәк, тик барыбер киске сәғәт 11 тулыуға, музыка тауышын әкренәйтеү талап ителә.

Депутаттар тағы ла төндә тауышланыусыларға (урамда бейеүҙәр ойоштороп, көслө музыка яңғыратыусыларға) штраф күләмен арттырҙы. Элекке 500-1000 һум урынына хәҙер граждандар - 2-3 мең, вазифалы кешеләр - 5-8 мең, компаниялар 20-30 мең, ҡабаттан эләккән осраҡта 50 мең һум түләргә тейеш буласаҡ. Төндә йөрөргә яратҡан балиғ булмағандар өсөн штраф күләме ике тапҡырға арттырыла. Балаларға киске сәғәт 11-ҙән өлкәндәр оҙатыуынан тыш кафела, клубтарҙа, дискотекаларҙа,шулай уҡ урамда йә автобуста йөрөү тыйыла икәнлекте иҫегеҙгә төшөрәбеҙ. Бының өсөн штрафты ата-әсәләр түләй. Элекке 1-2 мең урынына хәҙер 2-3 мең һумынды сығарып һалырға тура киләсәк.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Сун-Ят-Сен, Ҙур Мәскәү урамдары сигендә һәм Киров районының Әй урамы дауамындағы кварталдың план проектын раҫлау тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Яҡын көндәрҙә был территорияла "Госстрой" компанияһы төҙөлөш эштәре башлаясаҡ. Әле был территорияла баҡса участкалары, гараждар, туҙған шәхси йорттар урынлашҡан.

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә "Ҡаланы таҙартыу буйынса махсуслаштырылған автомобиль хужалығы" предприятиеһы директоры Рәмил Ғүмәровтың сығышы тыңланды. Билдәләнеүенсә, Өфөлә тәүлегенә 7,7 мең куб. метр сүп-сар барлыҡҡа килә. Йылына 2,9 млн куб. м. етештереү һәм ҡулланыу ҡалдыҡтары йыйыла. Шуға ла сығарыла торған сүп-сар күләме йылдан-йыл арта бара. Быйыл, мәсәлән, былтырғыға ҡарағанда ул 14,2 процентҡа артҡан. Шуға ла сүп-сарҙы сорттарға айырыуҙың яңы алымдарын индереү, яңы контейнер майҙансыҡтары булдырыу ихтыяжы арта.

✓Балтия илдәрендә алдынғы фармацевтик предприятие иҫәпләнгән, башлыса йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы, яман шешкә ҡаршы дарыуҙар етештергән "Гриндекс" компанияһы Өфөлә лә үҙенең предприятиеһын асырға ниәтләй. Яҡын көндәрҙә компания етәксеһе Киров Липман ошо тураһағы һөйләшеүҙәр өсөн баш ҡалаға киләсәк, тип хәбәр итте БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Дмитрий Шаронов.

✓18 июлдә 14 сәғәттән 20 сәғәткә тиклем баш ҡаланың Аксаков паркында "Ғаилә байрамы" сараһын тамаша ҡыла алаһығыҙ. "Юғалтыуҙар юҡ" мәрхәмәтлек фонды ойошторған байрамда спорт-интеллектуаль уйындарҙа, фотосессияла ҡатнаша, күргәҙмә-йәрминкәләр хеҙмәтенән файҙалана алаһығыҙ. Шулай уҡ байрамда ҡатнашыусылар ауыр сирле балаларға мәрхәмәтлек ярҙамы ла күрһәтә аласаҡ.

✓15 июлдә "Ҡунаҡһарай" сауҙа комплексы майҙанында Халыҡ-ара мәҙәниәттәр фестивале үткәрелә. Уны "AIESEC-Өфө" Башҡортостан студенттарының төбәк йәмәғәт ойошмаһы ойоштора. Майҙанда сит ил студенттары үҙ иле мәҙәниәте менән таныштырасаҡ. Сара 17 сәғәттә башлана.

*✓ Ауылда һарыҡ тотмаған кешеләр бик һирәк. Ләкин уның ҡырҡылған йөнө бер файҙаһыҙға әленеп тора. Шуға күрә ауылдаштарыбыҙға кейеҙ баҫыу, кейеҙҙән төрлө кәрәкле әйберҙәр эшләү серен өйрәтеүҙе лә маҡсат итеп алдыҡ.*



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# АҒИНӘЙҘӘР ТОТОНҒАС...

## эш сығарырҙар, иншалла!

**Кешеләрҙең үҙ тормошона йәм биреп, ғүмерен матур, изге эштәр башҡарып йәшәргә ынтылыуы һәр сакта ла һоҡланыу тыуҙыра. Белорет районының бәләкәй генә Үткәл ауылында йәшәүселәрҙе лә ошо исемлеккә индереү хата булмаҫ.**

Үҙ ауылының һәм йәш быуындың киләсәге, эргә тирә-яҡтың тәҙеклөгө өсөн битараф булмаған Үткәл ауылы фельдшеры Айһылыу Йомағужина быйна әле лә ауылдаштарын яңы башланғысҡа әйҙәне. Үткәлдәр ауылдарҙа аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр ҡорҙары ойоштороу буйынса Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты башлаған инициативаны тәүгеләрҙән булып күтәреп алды. Ауылдаштар сходында Ағинәйҙәр ҡороноң рәйесен һәм урынбаҫарын һайлап ҡуйғандан һуң, дәртләнеп эшкә тотондолар.

Ҡор үҙ эшен "Балалыҡ бүләк итәйек" акцияһына ҡушылыуҙан башланы. Акцияның маҡсатын өйҙән-өйгә йөрөп аңлатҡас, ауылдаштарҙың береһе лә был саранан ситтә ҡалманы. Һыу ташҡыны һәҙәмтәһендә бәләгә ҡалыусы Ғәбдүк ауылы халҡын да игтибарһыҙ ҡалдырманы үткәлдәр. Улар,7800 һум аҡса, 1200 һумлыҡ дарыуҙар һәм кейем-һалым йыйып, зыян күреүселәргә ебәрҙе.

Ағинәйҙәр ҡоро ауылдың тирәяғын таҙартыуға ла бөтә ауылдаштарын, уҡыусыларҙы дәррәү йәлеп итте һәм экологик өмәләрҙә әйләнгән һайын үткәреп торорға ҡарар итте. Әлеге ваҡытта урамдарға, ауылға ингән ергә төрлө саҡырыуҙар яҙылған аншлагтар ҡуйыу өҫтөндә эш алып барыла. Ауылды тәҙекләндереү, уны биҙәү маҡсатында "Иң матур йорт", "Иң матур баҡса" конкурстары иғлан ителгән. Сәскә орлоҡтары, йәшелсә-емеш үҫентеләре һатыу буйынса ойошторолған йәрминкәләр ҙә йыш үтәсәк, сөнки тирә-яҡты йәшелләндереүҙең мөһимлеген дә яҡшы аңлай ауылдаштар. Ошо йәһәттән, мәктәп эргәһендә әллә нисә йылдар буш ятҡан баҡсаға ла күмәк көс менән ағастар ултыртылған.

Ағинәйҙәр сәләмәт, айыҡ тормош алып барыу, берәҙәк эттәр проблемаһын хәл итеү, ауыл клубында халҡыбыҙҙың онотолған һөнәрҙәре, ҡул эштәре буйынса түңәрәктәр ойоштороу йәһәтенән дә ҙур эштәр алып бара.

- Ауылда һарыҡ тотмаған кешеләр бик һирәк. Ләкин күп осраҡта уның ҡырҡылған йөнө бер файҙаһыҙға әленеп тора. Шуға күрә ауылдаштарыбыҙға кейеҙ баҫыу, кейеҙҙән төрлө кәрәкле әйберҙәр эшләү серен өйрәтеүҙе лә маҡсат итеп алдыҡ. Халҡыбыҙҙың матур йолаларын тергеҙәсәкбеҙ. Беҙ күтәргән һәр башланғысты ауылдаштарыбыҙ бер һүҙҙән күтәреп ала. Шуға күрә, алама ғәҙәттәрҙән арынып, ауылыбыҙға йәм биреп, гөрләтеп донъя көтөү өсөн тырышасаҡбыҙ, - ти Үткәл ауылының Ағинәйҙәр ҡоро рәйесе Айһылыу Йомағужина.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Белорет районы.**

# УРМАН ШАУЛАП ҮҪЕР...

**Ағасты берҙе ҡырҡһаң, унды ултырт, тигәнде үҙләштерергә ашығып бармай беҙҙең халыҡ. Шулай ҙа ағас үҫтереүҙе күңел талабы итеп алғандар бихисап. Бәй, ирмен тигән ир-егет үҙ ғүмерендә өй һалырға, бала үҫтерергә, ағас ултыртырға тейеш тәһә.**



Ошо йәһәттән Иҫке Собханголда йәшәүсе Ямаловтар ағас ултыртыу, парк булдырыу йәһәтенән барыһына ла өлгө булырлыҡ. Ғаилә башлығы Дәриғәт Ямалов әйтеүенсә, 2004 йылда Иҫке Собханголдон Ҡул урамы тапҡырындағы тау битендә, халыҡ теләндәгесә әйткәндә, Сейәлетау итәгендә Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙәре - 1945 йылдың март айында Берлин янында һәләк булған яҡташыбыҙ Әбдрәхим Аратовтың һәм Дәриғәт Ямаловтың олатаһы Зәки Кәримовтың яҡты иҫтәлегенә бағышлап, ағас ултырта, уларҙы кәртәләп алып, быйна тигән парк булдыра. Хәҙер ул ағастар 3-әр метрлыҡ бейеклектә үҫеп, тау битен йәмләп ултыра. Әйткәндәй, ағас ултыртыу идеяһы "Нөгөш" йәмғиәте етәксеһе, әлеге көндә Мәскәү Урман университетында уҡып йөрөүсе улы Динарҙан сыға. Атай кеше балаларының идеяһын бойомға ашырырға ярҙам итә. Май байрамында Мәскәүҙә Косыгин исемендәге Мәскәү дәүләт техник университетында уҡып йөрөүсе ҡыҙы ла ялға ҡайтҡан. "Балалар ҡайтҡан һайын паркка бара, ағастарын тәрбиәләй, уларҙы бала кеүек ҡосаҡлап ярата", ти бәхетле ата. Ошо көндәрҙә өлкән Ямалов улы Динарҙың тағы бер идеяһын бойомға ашырыу менән мәшғүл булды. Уның ағас ултыртыу тигән изге эшен Зәбир Аратов етәкселегендәге район ветстанцияһы ла күтәреп ала. Баҙал биҫтәһенең ҡурсаулыҡҡа яҡын биләмәһендәге паркка ике көн дауамында ҡарағай үҫентеләре ултырта хеҙмәткәрҙәр. "Нөгөш" йәмғиәте 200 төп ҡарағай үҫентеһе ултыртты, бергәләп тағы 500 үҫенте ултырттыҡ. Коллектив Ямаловтарҙың идеяһына ихлас ҡушылды. Экологик өмәләр быйың менән генә бөтмәҫ", - ти Зәбир Самат улы. Әйе, изге эш һәҙәмтә бирмәй ҡалмаҫ: Баҙал биҫтәһен йәмләп урман шаулап үҫер, ағас ултыртыусыларға Хоҙайҙың да, кешеләрҙең дә рәхмәте төшәр, иншаллаһ !

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ИҢ ЯҠЫН АРА

**Баҡсамда ағас йорт төҙөргә уйлайым, тик шуны асыҡлағым килә: йорт күршеләр участкаһынан ниндәй алыҫлыҡта булырға тейеш?**

- Санитар-көнкүреш шарттарға ярашлы, күрше участка сигенән рөхсәт ителгән иң бәләкәй ара:
- торлаҡ (йорт) төҙөләшө өсөн - 3 метр
- ваҡ мал һәм ҡош-ҡорт тотоу өсөн һарай - 4 метр
- башҡа төр ҡоролмалар -1 метр

## ҮҘЕГЕҘҘЕҢ МИЛЕК

**Яңыраҡ һатып алған дачамда йәшәйем. Участкамды хосусилаштырыу өсөн бик күп ваҡыт һәм аҡса кәрәк тип ишеттем. Уны нисек тиҙләтергә һәм арзаныраҡ итергә була?**

- Участкағыҙҙы хосусилаштырыу тәртибе, ваҡыты һәм хаҡы ниндәй документтарығыҙ булыуға бәйле. Әгәр ер участкаһын һатып алған булһағыҙ, уны хосусилаштырыу кәрәкмәй - ул хәҙер былай ҙа һеҙҙең милек.

## ХУЖАЛАРЫ БУЛМАҺА...

**Ауылда йортобоҙ бар, ә эргәбеҙҙә ҡасандыр хужалары булып, хәҙер ташландыҡҡа әйләнгән участкалар бар. Әлегә хужалары йә вариҫсыларҙың кем икәнен асыҡлай алманыҡ. Үҙебеҙгә сиктәш бер-ике участканы һатып алыр өсөн ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

- Тәүҙә шулай ҙа был ерҙәрҙең кемдәргәләр күсеүе-күсмәүе хаҡында район хакимиәтенә барып, асыҡлыҡ индерергә тырышығыҙ. Әгәр ҙә архивта был участкаларҙың рәсми рәүештә кемдәрҙеңдер исеменә күсеүе хаҡында документтар булған хәлдә, уны алыу өсөн уларҙы ташландыҡ һәм хужаһыҙ итеп таныу ғәмәле башҡарылырға тейеш. Бындай мәсьәләләр менән урындағы үҙидара органы шөғөлләнә. Ә инде ерҙәрҙең хужалары хаҡында бер ниндәй ҙә документтар булмаһа, хакимиәткә уларҙы һеҙҙең шәхси милеккә тапшырыуҙы юллап мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## ВАҠЫТЫНДА ЮЛЛАМАҒАС

**Бынан 4 йыл элек вафат булған оләсәйемдең дачаһын үҙемдең исемгә күсереп тормайынса һатып ебәрә аламмы?**

- Милек менән фәҡәт милексе үҙе генә эш итә, ләкин дача оләсәйегеҙ исемендә булғас, һеҙ әлегә уны һата алмайһығыҙ. Тәүҙә вариҫсы хоҡуғына инеп, һеҙгә дачаны үҙ исемегеҙгә күсертергә кәрәк, шунан һатырға ла мөмкин. Эште еңеләйтергә теләһәгеҙ, дачаның хаҡын бер аҙ кәметеп, шул иҫәпкә документтар менән эш башҡарыуҙы (ышаныс ҡағыҙы яҙып) һатып алыусыға йөкмәтергә мөмкин йә булмаһа вариҫлыҡ хоҡуғына инеп, тейешле документтар юллау өсөн юрист, адвокат, риэлтор ялларға ла була. Мәсьәләнең шул яғы ла бар: оләсәйегеҙҙең вафатына 4 йыл үтеп киткәнлектән, ошо ваҡыт эсендә нотариусҡа мөрәжәғәт итмәүегеҙ сәбәпле, милеккә (дача) вариҫсылыҡ хоҡуғын таныу өсөн һеҙгә судҡа мөрәжәғәт итергә тура киләсәк.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Пиелонефрит, нефрит

❖ Көнөнә 2 сынаяҡ гөлйемеш емештәре төнәтмәһе эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәле (брусника) үләне япраҡтарына бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыу ҡайнап ултырған кәстрүлдә 20 минут тоторға. Көнөнә 2-3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ 2 балғалаҡ ҡырҡбыуын (хвощ полевой) үләнен бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә, бер сәғәт тоторға, һөҙөргә һәм көн дауамында эсергә.

❖ 1 балғалаҡ әнис (анис) орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә, көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә эсергә.

❖ 10 грамм үгәй инә үләненә 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға. Төнәтергә, көнөнә 3-4 тапҡыр 2-3 ҡалаҡлап эсергә.

❖ 30 грамм грыжник үләнен бер стакан ҡайнар һыуҙа төнәтеп, ашағандан һуң көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

❖ Любисток тип йөрөтөлгән үләндең тамырын 40 грамм алып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. 2 сәғәт урап, төнәтергә. Көн дауамында эсергә.

❖ 10 грамм ҡара ҡарағат үләне, 10 грамм меңъяпраҡ үләне, 10 грамм баллыбабай (яснотка) сәскәһе, 10 грамм эт дегәнәге үләне, 15 грамм дегәнәк тамыры, 15 грамм ҡайын бөрөһө, 20 грамм миләүшә үләне, 30 грамм талҡан емеше (толокнянка) үләне япрағын ҡушып, болғатырға. 20 грамм үләнде 10 минут буйы 1 литр һыуҙа бешерергә, 10 минут төнәтергә, һәр сәғәт һайын 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ **Бөйөр шештәренән.** Сөйәл үләне һутын араҡы йәки спирт менән 1:1 нисбәтендә ҡушырға, яҡшыраҡ һаҡланһын тиһәгеҙ, 1:2 нисбәтендә ҡушығыҙ. Һыуыҡта тотоғоҙ. Бер стакан һөткә 15 тамсы тамыҙып, көнөнә 3 тапҡыр, ашарға ярты сәғәт ҡалғас, эсергә. Шеш 15 көндән юҡҡа сыға.

❖ Урта Азияла ауырыу бөйөрҙәрҙе көнбағыштың һары сәскәләре менән дауалайҙар. Көнбағыш эшләпәһе тирәләй урынлашҡан һары таждарҙы йыйып, ҡояш төшмәгән урында киптергәс, йыл дауамында сәй кеүек бешереп, теләгәнсә эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ Тик башҡорт ҡына үҙ балаһын ҡолонсағым тип ярата. Ә ни өсөн быҙауым, бәрәсем, ҡуяным, бесәйем түгел? Халҡыбыҙҙың йылҡы малына булған ихтирамы, һөйөүе ошо һүҙ аша яратҡан кешеһенә еткереләләр, күрәһең.*

*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...
## дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Ауыҙ эсе һәм тын юлы ауырыуҙарына бәйле им-том

**Ауыҙлыҡ име.** Ауыҙҙың мөйөштәре иҙелеүсән була. Шуны ауыҙлыҡ булған, тиҙәр. Ауыҙлыҡтан шулайтып ҡотолалар. Берәү һорай:

- Ни булған?

- Ауыҙлыҡ булған! - тип, ауыҙлыҡ булған кеше йәки әсәһе әйтә, йә икәүләп әйтеп, кешнәйҙәр. Шулай өс тапҡыр ҡабатлана. Яуап биргәндә, былай тип тә өҫтәйҙәр:

*Елдән килһәң, елгә кит,*
*Һыуҙан килһәң, һыуға кит,*
*Ҡайҙан килһәң, шунда кит!*

**Ат ауыҙлығы менән имләү.** Ауыҙ осоноп, эренләп сыҡһа, "ауыҙлыҡ" булған, тиҙәр. Уны имләү өсөн ат ауыҙлығын ауыҙға алып: "Айғыр булдым! Айғыр булдым!" - тип кешнәргә кәрәк. Шулайтһаң, ауыҙлыҡ ауырыуы китә.

**Ирен осоноуҙан им-том.** Кеше утҡа төкөрһә, уның ирене осона һәм ирененә һары сабыртмалар сыға. Бынан ҡотолоу өсөн утҡа һары май тамыҙыр кәрәк. Имләүсе кеше лә, ауырыу ҙа им-том иткәндә шым ултырырға тейеш. Тауыш сыҡһа, файҙаһы булмай.

**Ауыҙ осоноу.** Диалекттарҙа ауыҙлыҡ булыу, ауыҙлыҡ, ауыҙ бешмә кеүек һүҙҙәр осрай. Ышаныуҙар буйынса, ауыҙға яман заттар тейһә (үпһә, ҡағылһа, һуҡһа) йәки улар ауыҙ иткән, ҡағылған аш-һыуҙы, һауыт-һабаны ауыҙға тейҙерһәң, ауыҙ осона, йәғни ауыҙға бөрсөк-бөрсөк сабыртма сыға. Был ауырыуҙы, ғәҙәттә, ат ауыҙлығын тешләтеп имләйҙәр.

Башҡорттарҙа ауыҙ осоноуға ҡаршы иҫкәртеү саралары системаһы ла булған. Мәҫәлән, башҡорттар ит ашағандан һуң мотлаҡ ауыҙ-морондо сайҡатырға ҡуша. Сайҡатмаһаң, ен-шайтан ауыҙыңды ялай икән. Бигерәк тә ауыҙҙы сайҡатмайынса урамға сығыуҙы тыялар. Шунын өсөн ит ашы ашағандан һуң, еҙ тас һәм ҡомған менән рәтләп ҡул һәм ауыҙ-морон сайҙырыу йолаһы булған.

Шулай уҡ башҡорттарҙа аш-һыуҙы, тоҙҙо асыҡ ҡалдырырға ярамай. Ышаныуҙар буйынса, асыҡ ҡалған тоҙға, аш-һыуға шайтан төкөрә. Шуны ашаған кешенең ауыҙы осона, тиҙәр.

**Йылан мөгөҙө менән имләү.** Әгәр иренгә ауырыу күберсеп сыҡһа, күбәләк ырыуы әбейҙәре мөгөҙҙө (йылан тиреһен) һыулап һөртөп, былай тигәндәр:

*Ҡортҡа ҡорт! Бына сағам, бына яғам!*
*Күҙең-башыңды сағам!*
*Ауырыу китте, баҡ!*
*Бына китте, баҡ!*

**Тел осоноуға им.**

- Телем осонған.
- Бесәй к...нә, - ти имсе.
- Эй, хайран телемде хур иттең! Тфү, тфү, тфү!
- Тағы әйт.
- Телем осонған.
- Эт к...нә.
- Эй, хайран телемде хур иттең! Тфү, тфү, тфү!
- Тағы әйт.
- Телем осонған. Ҡасан бөтөр?
- Һә тигәнсе, мә тигәнсе бөтөр.
- Эй, хайран телемде хур иттең! Бөтһөн инде, Хоҙайым!

Тфү, тфү, тфү!

**Осоноуға салғы име.** Осоноп ауырығанда, салғыны ҡып-ҡыҙыл итеп ҡыҙҙыралар ҙа ауырыуҙы сығарып, өй мөйөшөнә ултырталар, шунан салғыға өс тапҡыр шыжлатып һыу бөркәләр. Бөрккәндә ошо әпсенде әйтәләр:

*Ҡайҙан килһәң, шунда кит!*
*Көлдән килһәң, көлгә кит!*
*Һыуҙан килһәң, һыуға кит!*
*Килһәң көн батышынан,*
*Көндөң батышына кит!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ...

## яратыу һүҙҙәре һөйләү өсөн



**Һуңғы осорҙа башҡорт телендәге яратыу һүҙҙәре менән ҡыҙыҡһынып киттем. Эҙләнә торғас, былдай һүҙҙәрҙең күплегенә хайран ҡалдым. Шунда ғына профессор Жәлил Кейекбаевтың "Башҡорт теле һөйөү һүҙҙәре генә һөйләү өсөн яратылған" тип әйткәненә ышандым. Туған телебеҙҙе төплө өйрәнгән, башҡа телдәр менән сағыштырып, уны системаға һалған, ғилми хеҙмәттәр яҙған, үҙе лә байтаҡ телдәр белгән ғалим күп йыллыҡ эш дәүерендә юҡҡа ғына ошондай һығымтаға килмәгәндер, күрәһең.**

Һүҙҙең тылсым көсө тураһында элек-электән белгәндәр. Был халыҡ ижадында ла сағыла. "Бер йәҙрә берҙе үлтерер, бер һүҙ меңде үлтерер", "Донъяла иң әсе нәмә лә тел, иң сөсө нәмә лә тел", "Донъяны ел боҙор, кеше араһын тел боҙор", "Ике уйла, бер һөйлә", "Йөрәктән сыҡҡан һүҙ йөрәккә етә", "Ҡарғыш алма, алғыш ал", "Ташты ираткән дә - һүҙ, башты сереткән дә - һүҙ", "Уҡ - тәнде, һүҙ йәнде яралай", "Һүҙ, һөйләй белһәң - ирмәк, һөйләй белмәһәң - имгәк" һымаҡ мәҡәлдәр - ата-бабаларыбыҙҙың күп быуаттар һуҙымында тупланған тәжрибәһе, аҡылы. Борондан ошондай мәҡәл-әйтемдәр, ғибрәтле һәм фәһемле риүәйәт-хикәйәттәр ярҙамында кешене тел менән һаҡ булырға, уйлап һөйләргә саҡырғандар. "Йәнгә дауа булырҙай", "йыланды ла өңөнән сығарырҙай", "айыуҙы ла бейетерҙәй" ошондай ҡанатлы һүҙҙәр - халҡыбыҙҙың оло бер хазинаһы ул.

"Башҡорттар улар йомшаҡ һүҙгә һаранырак инде" тигән ҡараш та йәшәй ул халыҡ араһында. Ошо фекерҙе кире ҡағыу маҡсатында мин нәфис әҙәбиәткә мөрәжәғәт иттем. Бай мираҫлы әҙәби әҫәрҙәребеҙҙең бер нисәүһе ярҙамында ғына ла был һүҙҙәрҙең дөрөҫ түгеллеген иҫбатлай алам.

* * *

**Йософ:** Тулған айға оҡшай һинең йөҙөң,
Һөйләһәң, тыңламаҡҡа татлы һүҙең.
**Зөләйха:** Әй,миһырбанлы, һөймәлекле,
Холҡоң һәйбәт, йөҙөң яҡты, һүҙең татлы.

* * *

**Алпамыша:** Барсынһылыу, һылыу,
Йөҙөң күрһәм, күҙем ҡамаша.
**Барсынһылыу:** Батырлығың баштан ашҡан,
Матурлығың һыуҙай ташҡын.
Һиндер, егет, берҙер, егет,
Йөрәгемде килеп ҡаҡҡан.

* * *

**Буҙйегет:** Йәндәй һөйгән йәрем!
**Сәхипъямал:** Эй, егет һин, эй, егет,
Күл эсендә бер егет!

* * *

**Таһир:** Күңелем йәр иткәнһең, күҙҙәрем зар иткәнһең.
**Зөһрә:** Мең-мең маһир йән-ҡара күҙем,Таһирйән!

* * *

**Аҡйегет:** Уң ҡанатым!
**Зөбәржәт:** Ҡыйғыр ҡошом!

* * *

**Төлкөсура:** Аҡ фәрештәм минең, матурым!
**Сажиҙә:** Бәхетем!

* * *

**Ҡуҙыйкүрпәс:** Бәғерем, йән киҫәгем.
Ҡәҙерлем, һылыуҙарҙың һылыуы!
**Маянһылыу:** Һөйөклөм Ҡуҙыйкүрпәс!

Былдай яратыу һүҙҙәре нәфис әҙәбиәттә генә түгел, йәнле һөйләү телендә лә етерлек. Һәр беребеҙ иҫ белә-белгәндәй бирле атай-әсәйҙәребеҙҙең, яҡындарыбыҙҙың яғымлы һүҙҙәрен күңелебеҙгә һеңдереп үҫәбеҙ. Был һүҙҙәр ғүмер буйы күңелдәрҙе йылытып тороусы бер усаҡ һымаҡ иҫтә ҡалған. Үҙебеҙҙең Ейәнсура районы Ибрай ауылында ҡулланылған яратыу һүҙҙәрен өйрәнгәндә мин бик ҡыҙыҡлы "асыш"тарға ла тап булдым һәм уларҙы төркөмләп ҡараным.

1. Төҫ-ҡиәфәтенә ҡарап әйтелгән һүҙҙәр: һары сурайым, ҡараҡасым, ҡарасманым, һарысайым, аппағым, йомшағым.

2. Холҡона бәйле, йәки унда күрергә теләгән сифаттар: һаҡлаусым-яҡлаусым, ҙур үҫкәнем, үҫкәнем, батырым, уңғаным, ярҙамсым, аҡыллым, матурым, матурҡасым, тәмләкәсем, тормош терәгем, шәп кенәһең бит әй, наҙлыҡай, һылыуым, гүзәлем.

3. Кеше ағзалары атамаһына бәйле һүҙҙәр (халыҡ кешенең был ағзаларын иң мөһиме, иң ҡәҙерлеһе тип һанағандыр, шуға ла улар яратыу һүҙҙәре булып киткәндер): күҙ нурым, йөрәгем, йөрәк майым, уң ҡулым, ҡабарып торған үпкәм, бауыр итем, нескә билем, күҙ алмам, йөрәк ярам, йөрәк парәм.

4. Ҡош исемдәренә бәйле һүҙҙәр (күрәһең, ҡоштар иңләп осор иркенлек, улар күтәрелер бейеклек хистойғоларға күсәлер): аҡҡошом, былбылым, һандуғасым, сепешем, ҡошсоғом, бөркөтөм, ҡарлуғасым, күбәләгем.

5. Ҡиммәтле аҫылташтар исеменә бәйле: Хоҙай биргән хазинам, алтын бөртөгөм, алтыным, алтын бағанам, көмөшөм.

6. Күк есемдәре атамаларына бәйле һүҙҙәр: ҡояшым, айым, йондоҙом.

7. Кешенең ҡәҙерен баһалау һүҙҙәре: тормошом, ҡәҙерлем, һөйөклөм, бәхетем, йәнейем, бәғерем, берҙән-берем, йән киҫәккәйем, йәнем-бәғрем, фәрештәм, йәнкәй, ышанысым, өмөтөм, йыуанысым, ирмәгем, ҡыуанысым, таянысым, терәгем.

8. Баланы яратып, үҙенеке генә булыуын күрһәткән һүҙҙәр: йәшәүемдең мәғәнәһе, бәпесем, бәләкәсем, бәпәйем, балаҡайым, гөлкәйем, бергенәм, йәнем, сабыйым, кинйәкәйем.

9. Тик башҡорт ҡына үҙ балаһын ҡолонсағым тип ярата. Ә ни өсөн быҙауым, бәрәсем түгел? Йә ҡайһы бер телдәрҙә йыш ҡулланылған ҡуяным, бесәйем түгел? Халҡыбыҙҙың йылҡы малына булған ихтирамы, һөйөүе ошо һүҙ аша яратҡан кешеһенә еткереләләр, күрәһең.

10. Был төркөмгә ингән һүҙҙәр бигерәк тә ҡыҙыҡлы. Улар кешенең бер ниндәй етешһеҙлегенә, кәмселегенә ҡарамай яратыуын күрһәтә: бисурам, китек тешем, йомро йомғағым, мумала (бумала) башым, ялбыр башым, йырыҡ ауыҙым, ҡурҡаҡ ҡуянғынамды, эшҡашмағанымды, тайыш табаным, маңка танауым, кафиям (йүнһеҙем), бабай ғынам, хәйлә тоҡсайым, ауыҙыңа шайтан төкөргөрө, тумалағым, арыҡ шайтаным, һутыйым, суҡынмағырым, ҡоромағырым, хайырһыҙ, оя төбөм, төпсөгөм. (Һорашҡанда шундай яратыу һүҙен дә осраттым: "Ленин башым, Брежнев ҡашым". Баҡтиһәң, был ир кешенең башы пеләш, ҡаштары ҡалын икән). 11.Яратыу хистәрен белдереү өсөн ҡайһы бер һүҙҙәр боҙолоп та әйтелә, йәиһә бөтөнләй телдә булмаған һүҙҙәр ҡулланыла: тәтүсем (матурым), укалатым (улыҡасым), сепекәсем (себешем), бәпетем (бәпесем), бәпесүкем.

Үрҙә яҙылған ҡайһы бер һүҙҙәр хатта исем дә булып киткән: Хазина, Былбыл, Һандуғас, Ҡарлуғас, Ирмәк, Батыр, Көмөш(бикә), Алтын(бикә)

Гөлкәй, Ҡыуаныс, Һылыу, Гүзәл, Кинйә(бикә).

Бына ошондай бик матур яратыу һүҙҙәренә тап булдым мин. Уларҙың күп төрлө булыуы, әлбиттә, "башҡорт йомшак һүҙгә һаран" тигән фекерҙе инҡар итеп, ғалим Жәлил Кейекбаевтың әйткәндәрен дәлилләй. Ләкин барыбер беҙ был һүҙҙәрҙең бөтәһен дә ҡулланырға ашыҡмайбыҙ, уларҙың күпселеге күңелдә генә һаҡлана. Халыҡ шуға ла "Аҫыл һүҙ - күңел төбөндә" тигәндер. Ә бит ошо һүҙҙәрҙе йышыраҡ ҡулланһаҡ, телебеҙ тағы ла матурыраҡ, яғымлыраҡ яңғырар, тойғолар ҙа көслөрәк, аралар ҙа яҡыныраҡ булыр ине. Халҡыбыҙҙың "Йылы һүҙ йәнде иретә" тигән мәҡәле лә бар бит әле!

**Зәлифә ӘБДЕЛМӘНОВА,**
**БДПУ студенты.**

✓ *Был башҡорт халҡының боронғо ата-олатаһы булған аримасп-аргиппейҙың берҙән-бер һүрәте. Унның башында типик башҡорт ҡамсат бүрке - осло, түбәһе алға бөгөлөп тора, тире менән ҡаймаланған һәм артта ике ҡойроҡ.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ ҺӘМ...

## Боронғо Греция мифтары араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?



"Ариаспа" "ир-ат", "ат үрсетеүсе кеше" тип тәржемә ителә. "Ир-ат" һүҙе боронғо башҡорттарҙың ата-бабалары телендә лә булған. Боронғо грек телендәге "аргиппей" һүҙе лә тәржемәлә шундай уҡ аңлатма бирә. "Гиппо" - ат, "гипподром" - аттар ярышҡан урын. Батша заманында һәм XX быуат урталарына тиклем һәм Р.Ғ. Кузеевтың башҡорт халҡының күсмә тормош алып барыуы тураһындағы концепцияһы барлыҡҡа килгәнсе, башҡорттар Уралдың боронғо халҡының варисҭары тип һанаған тикшеренеүселәр һәм Геродоттың хеҙмәттәрен тәржемә итеүселәр, атап әйткәндә, тарих һәм филология фәндәре докторы С. Я. Лурье, аргиппейҙарҙы хәҙерге баш-ҡорттарҙың ата-олаталары тип иҫәпләгән.

Арийҙар телендә ат ҡараусы ариаспа тип аталған, ә ике быуат үткәндән һуң, Геродот яҙмаларында ул боронғо грек телендә аргиппей тип билдәләнә. Был тап килеү безгә Аристей һәм Геродот бер үк халыҡ - башҡорттарҙың боронғо ата-олаталары, әммә төрлө атамалар аҫтында ариаспа һәм аргиппей тураһында яҙған, тип иҫәпләргә мөмкинлек бирә.

Үкенескә күрә, беҙгә Аристейҙың поэмаһы тексы килеп етмәгән. Бары тик сюжеттары хаҡында бер нисә иҫкә алыу ғына бар. Әммә Геродоттың "Тарихы" буйынса унның "Урал батыр" кеүек үк шиғри юлдарға һалынған тарихи хикәйәләү булыуы билдәле. Аристей үҙе, аримасп-аргиппейҙарҙың телен белмәйенсә, улар эргәһендә бик аҙ йәшәп, улар тураһында эпик, тарихи хикәйәләү яҙа алыр инеме икән? Бик шикле. Был халыҡ тураһында бары тик шул халыҡ үҙе, быуаттар менән иҫәпләнгән оҙайлы ваҡытта ғына яҙа алыр ине. Һәм был эпос Аристей Урал аръяғына килгәндә үк булған. Ул, күрәһең, уны ошонда йәшәүсе халыҡтар, тәбиғәт байлыҡтары тураһындағы мәғлүмәт өҫтәп, боронғо грек телендә яҙып алған һәм тыуған иленә әйләнеп ҡайтҡас яҙылғанын шиғри юлға һалғандыр. Шулай итеп, "Аримаспей" йәки "Аримасптар тураһында эпос" тыуған.

Кемгәлер, бәлки, саманан артыҡ ҡыйыу күренер, әммә һәр фекер йәшәүгә хоҡуҡлы, тигәндән сығып, үҙемдең версиямды тәҡдим итәм. Минеңсә, Аристейҙың "Аримасптар тураһында эпос"ы - боронғо грек теленә тәржемә ителгән "Урал батыр" эпосы ул. Шуға ла боронғо грек мифтарындағы ваҡиғаларҙы һүрәтләгән сюжеттар "Урал батыр"ҙа һөйләнгән тарих менән тап килә.

Әлбиттә, Аристейҙың хикәйәләүҙәре, боронғо гректар өсөн алтын ятҡылығы һәм уны табыу урыны эргәһендә йәшәгән халыҡтар тураһында мәғлүмәт ҙур иғтибар тыуҙыра. Антик әҙәбиәттә Аристейҙың ижады, нигеҙҙә, төп сюжет линияһында - аримасптарҙың алтынды һаҡлаған грифондар менән көрәше - иҫкә алына. Плиний, мәҫәлән, алтынды үҙҙәрендә ҡалдырырға тырышҡан ҡомһоҙҙарға, ә икенселәрҙең уны урларға тырышыуына аптырай. Беҙҙең эраның II быуатында йәшәүсе грек авторы Павсаний былай тип яҙа: "Аристей говорит в своей поэме, что грифоны сражаются за золото с аримаспами, живущими над исседонами, а золото, которое сторожат грифоны, родит земля". Грифондар - арыҫланға оҡшаған, ҡанатлы, бөркөт суҡышлы хайуандар. Беҙҙең күҙаллауҙар буйынса, улар "Урал батыр" эпосындағы дейеүҙәр. Боронғо грек сәнғәтендә аримапастарҙың грифондар менән алышын һүрәтләгән алтын ялатылған терракота һаҡланып ҡалған (2-се һүрәттә). Был үҙенә күрә башҡорт халҡының боронғо ата-олатаһы булған аримасп-аргиппейҙың берҙән-бер һүрәте (беҙҙең эраға тиклем IV быуат). Унның башында типик башҡорт ҡамсат бүрке - осло, түбәһе алға бөгөлөп тора, тире менән ҡаймаланған һәм артта ике ҡойроҡ.

Шул уҡ грифондарҙың аримасптарға һөжүме (Урал батырҙың осоусы йыртҡыстар - дейеүҙәр менән алышы) Зевстың ҡатыны, ер эшкәртеү һәм уңыш алиһәһе Деметраның баш кейемендә лә сағылыш тапҡан. Был беҙҙең эраға тиклем IV быуатта алтындан һәм эмалдән эшләнгән әйбер 1864 йылда Тамань ярымутрауының Оло Игеҙәк (Большая Близница) ҡурғанын ҡаҙғанда табылған (3-сө һүрәт). Күрәһең, Деметраның баш кейеме йола башҡарыу (ритуал) маҡсатында файҙаланылған. Сөнки, әгәр ямғыр, йәшен һәм күк күкрәү Зевс хакимлығында булһа, ҡоролоҡ һәм уңыш менән Деметра идара иткән. Гомер һәм Аристей заманында Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ ярҙарында Боспор Киммерийский антик дәүләте булған. Беҙҙең эраға тиклем IV быуатта Көнбайыш Грециянан алып Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ ярҙарына тиклем ҙур территорияла аримасптарҙың грифондар менән алышының һүрәтләнешенең таралыуы унның "Аримасптар тураһында эпос"тың нигеҙе булыуы хаҡында һөйләй. Быны беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән яҙма сығанаҡтарҙа ошо сюжеттың һаҡланыуы ла раҫлай (4-се һүрәт).

**Радик ВАХИТОВ.**
**(Дауамы. Башы 25-26-сы һандарҙа).**



һүрәт 4.



һүрәт 2.



һүрәт 3.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Йыш ҡына бер ғаиләлә мал һаны бер нисә йөҙ башҡа еткәнлектән, хатта ғаиләлә бер нисә эшсе ҡулы булыуға ҡарамаҫтан, малдарҙы ҡышҡыһын ауылда тотоу өсөн етерлек мал аҙығы әҙерләү мөмкин булмай. Күп мал тотоу өсөн төп шарт булып йәйгеһен йәйләүҙән йәйләүгә генә түгел, ҡышҡыһын тибендән тибенгә йөрөтөү мөмкинлеге торған. Әммә бындай мөмкинлекте Башҡортостандың барлыҡ территорияһында ла тормошҡа ашырыу мөмкин булмаған. Ҡышын яуым-төшөм ҡалыныраҡ ятҡан көнбайыш Урал алды райондарына ҡарағанда, Урал аръяғы далаларында, ҡарҙы ел һепереп торғас, малдар үҙҙәренә ҡар аҫтынан да аҙыҡты еңел тапҡан. Урал аръяғы ҡатайҙарында, далалы ерҙәрҙәге күбәләк-теләүҙәрҙә, тамъянтүңгәүерҙәрҙә, бөрйәндәрҙә һәм үҫәргәндәрҙә аттар йыл әйләнәһенә тибендә йөрөгән. Меңдәрҙә, юрматыларҙа, көнсығыш инйәр-ҡатайҙарҙа, урманлы-яланлы күбәләк-теләүҙәрҙә, тамъян-түңгәүерҙәрҙә, ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙа, бөрйән һәм үҫәргәндәрҙә аттар ҡыштың яртыһына тиклем генә тибендә йөрөгән. Тамъян-түңгәүерҙәрҙә һәм күбәләк-теләүҙәрҙә һарыҡтар ҡыш уртаһына тиклем тибендә булған, ә ҡар әҙ булған йылдарҙа йыл әйләнәһенә ҡайтмаған.

Тибен ваҡытында һәр ваҡыт аттар алдан, тояҡтары менән ҡарҙы асып һәм үләндәрҙең өҫкө өлөшөн ашап барған. Улар артынан һарыҡтар һәм иң аҙаҡтан үләндәрҙе тамырына тиклем ашаусы кәзәләр йөрөгән.

Аҙыҡ булмағанлыҡтан, малдарҙың ҡырылыуы көтөүселәрҙең, бигерәк тә малсылыҡ төп шөғөл булғандар өсөн, төп бәлә булып торған. Шуға күрә башҡорттарға һәр саҡ һәм һәр ерҙә малдарҙы ҡышын ашатыу өсөн билдәле күләмдә бесән тупларға кәрәк булған.

Хатта ҡышын ҡар аҙ яуған йылдарҙа ла, ялан, дала райондарында аттарҙы ай самаһы өҫтәмә ашатырға, ә ҡолондарҙы һәм эре мөгөҙлө малдарҙы тағы ла оҙағыраҡ өҫтәмә туҡландырырға тура килгән. Ялан-урманлы һәм урманлы районадарҙа барлыҡ малдарҙы ҡыштың билдәле бер ваҡыты үткәнсе бесән һәм һалам ашатып тотҡандар.

Башҡорттарҙың XVII, XVIII быуаттарҙа үҙ ерҙәренә припущенниктарҙы индереү яҙмаларының барыһында ла "бесән сабыу" хоҡуғы билдәләнгән. XVII быуат башында, Юхневтың мәғлүмәттәре буйынса, Нуғай һәм Себер дарүғаһы башҡорттары йәйгеһен бесәнде "ваҡ мал һәм аттар өсөн әҙерләгән", уларҙы ҡышҡыһын һаҡлап тотонған. Ҡаҙан дарүғаһы башҡорттары малдарҙы яҡшыраҡ ашатҡан, сөнки уларҙың игене һәм һаламы күп булған, ә Уса дарүғаһы башҡорттары бик күп бесән сапҡан.



И. И. Лепехин белдереүенсә, XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорттар бесәнде бары тик көмөрө - ураҡҡа оҡшаған ҡыҫҡа һаплы салғы менәен сапҡан (һүрәт). Унның менән бейек үҫкән, урман үләнен генә сабыу мөмкин булған һәм бик ныҡ эйелеп сабырға тура килгән. Минең башҡорттар араһында йөрөгән ваҡытымда ғәйнәләрҙән башҡа берәү ҙә көмөрө салғы менән бесән сапманы. Бөтөн ерҙә бесән сабыу өсөн рус салғыһы менән сабып, уны тырма менән йыйып, ағас һәнәктәр менән өйәләр ине.



# МИН ХАЛҠЫМА

## шуға ла уға эскерһеҙ

**Моғайын да, милләттәштәрем араһында, зыялы кеше ниндәй булырға тейеш, тигән һорау алыу үткәрһәң, уларҙы белеүселәрҙең барыһы ла, артыҡ уйлап та тормайынса ғына: "Аҙнабаевтар кеүек!" - тип яуаплар ине. Ысынлап та, ағалы-ҡустылы Марат һәм Румил Аҙнабаевтарҙы Башҡортостанда ғына түгел, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә лә үҙ кеше итеп беләләр. Хатта Ҡурған өлкәһе башҡорттары атаҡлы күҙ табибы Марат Аҙнабаев хаҡында: "Ул беҙҙең күҙҙәребеҙҙе асты", - тип, уны мөғжизә тыуҙырыусыға тиңләйҙәр. Марат Талғат улы милләттәштәребеҙҙең физик күҙен асһа, Румил Талғат улы иһә, ҡайҙа ғына эшләмәһен, ниндәй генә вазифа биләмәһен, халҡының рухиәтен тергеҙеүгә, күңел күҙен асыуға ҙур көс һала. Туғандарҙың кесеһе бөгөн башҡалар кеүек тамаҡ ярып йөрөмәһә лә, тыныс ҡына, шым ғына халҡыбыҙ өсөн башҡарылған ҙур эштәрҙең башында тора; ололарға - ололоҡло, кеселәргә - кеселекле, ниндәй генә хәл-торош килеп тыумаһын, тыныслыҡ һаҡлаған һәм бер ваҡытта ла юҡҡа-барға тауыш күтәрмәгән, тап ошо сифаты аша талапсан була белгән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил АҘНАБАЕВтың булмышын үҙе һөйләгәндәр аша ҡабаттан асырға тырышыуыбыҙ.**

### Эш мине үҙе эҙләне

Бөгөн үткән тормош юлыма баһа биреп, тулы ышаныс менән шулай тип әйтә алам. Аллаһы Тәғәлә мәрхәмәтеме, әллә уның эштән бәхетле итеүе ошомо, әммә бер ваҡытта ла, ҡайҙан ниндәй эш табырға икән, тип уйлап баш ватҡаным булманы. Башҡорт дәүләт аграр университетының механика факультетын тамамлап, инженер һөнәре алып, тыуған хужалығыма эшкә ҡайтҡан йылдарҙа уҡ халҡыма аныҡ ярҙам күрһәтә башланым, тип әйтә алам. Сөнки ауылдарҙа ул ваҡытта бөтөн нәмә ҡул көсө менән башҡарыла, һыйырҙарҙы ҡул менән һауалар, тиҙәкте ҡул менән таҙарталар, бесәнде ҡул менән эшләйҙәр ине. Яйлап ҡына ауыл хеҙмәтсененең эшен еңеләйтә, механизациялап, һуңынан ауылға К-700 тракторҙары, төрлө махсус техника ҡайтара башланыҡ. Әммә оҙаҡ эшләргә тура килмәне, Свердловск өлкәһенә, Юғары партия мәктәбенә уҡырға ебәрҙеләр. Уны ҡыҙыл дипломға тамамлап ҡайтҡас, КПСС Өлкә комитетына эшкә алдылар. Бер нисә айҙан инде Баҡалы районына КПСС райкомының икенсе секретары итеп тәғәйенләнеләр. Баҡалыла эшләгән йылдарымда 70 километр газ үткәреүгә, ауылдарға асфальт һалдырыуға, һәр колхоз үҙәгендә медпункттар астырыуға өлгөштем. Быны ни өсөн әйтәм? Хәҙер ауылдарҙың күпселегендә ошондай медпункттарҙы ғына түгел, хатта дауаханаларҙы оптималләштереү һылтауы менән үҙәкләштерәләр һәм ябалар. Ә халыҡ, бигерәк тә өлкәндәр, юл йөрөргә ауырһына. Сығымдар ҙа бәкәлгә һуға, әллә ҡайҙа күрше районға барып, күпме сират торорһоң да, шул көндә үк барлыҡ табиптарҙы үтеп, анализдар тапшырып бөтөрөң дә икеле. Былай ҙа, башҡа милләттәрҙән айырмалы, халҡыбыҙ ҡаны аҡһа ла, тирем сыға, тип өйрәнгән, тиҙ генә дауаханаларға бара һалып та бармай. Хәҙер инде улар бөтөнләй хәле мөшкөлләнһә генә күтәрелеп сығып китерме, әллә яҙмышына күнеп, шым ғына аяҡ һуҙырмы? Шуныһы әсендерә.

### Халыҡ хеҙмәтсеһе

Баҡалы районында Мәҙәниәт йорто һалдыра башлағас, яҙмыш бөтөнләй уйламаған боролош яһатты. Минән һорап та тормай, хатта райкомдың ҡаршы килеүенә ҡарамаҫтан, Ҡамышлытамаҡ тигән ауыл халҡы мине БР Юғары Советына депутат итеп күрһәтеп, һайлап та ҡуйҙылар. Юғары Советтың тәүге ултырышында йәшерен тауыш биреү юлы менән комиссиялар рәйестәре һайланды. Мине Урындағы үҙидара органдары һәм төбәктәр (районлар) менән эшләү комиссияһы рәйесе итеп ҡуйҙылар. Хәҙер алдыма райком секретары һәм Комиссия рәйесе вазифаһы араһында һайлау килеп баҫты. Баҡалыға ҡайтып, барлыҡ етәкселәрҙе, райсовет депутаттарын йыйып, хәл-торошто аңлатып бирҙем һәм "Баш ҡалаға ебәрһәгеҙме, әллә районда ҡалайыммы?" тигән һорау ҡуйҙым. Шул саҡ оло ғына йәштәрҙәге бер хужалыҡ етәксеһе һүҙ алды һәм: "Ҡустым, үҙең күреп тораһың, болғанышлы заманалар башланды, ситтән килгән етәкселәрҙе ҡыуып ҡайтарып, урындағыларға өстөнлөк бирәләр. Донъя хәлен белеп булмай, алдыңда шундай перспектива асылғас, үрлә, әйҙә", - тине. Шулай итеп, БР Юғары Советында эш башланым.

Ул осор уҙған быуаттың шанлы 90-сы - республикаға суверенитет яулау йылдарына тура килде. Хәтеремдә, суверенитет мәсьәләһе буйынса фекер алышыуға арналған ултырыш ике көн дауам итте. Беренсе көндә бер ниндәй ҙә уртаҡ фекергә килә алмай таралыштыҡ. Берәүҙәр үҙаллылыҡты яҡлап сығыш яһаһа, ҡайһы бер депутаттар ҡаршы сыҡты. Ә беҙ, башҡорт милләтле депутаттар, һан яғынан әҙселектәбеҙ. Эш тауыш биреүгә китһә, беҙҙең файҙаға булмаясаҡ. Ултырышты икенсе көн дауам итергә килешеп, таралышҡас, башҡорт депутаттары тиҙ генә бер бүлмәгә йыйылдыҡ. Әгәр ҙә иртәгә суверенитет өсөн тауыш биреүҙә етерлек тауыш йыя алмаһаҡ, барыбыҙ ҙа депутат мандаттарын һалып, ултырышты ташлап сығасаҡбыҙ, тип һөйләшеп килештек. Сөнки беҙҙе халыҡ һайлап ҡуйған, ә суверенитет - ул халыҡ ихтыяры. Шуны раҫлағандай, сессия барған ваҡытта урамда төрлө райондарҙан килгән халыҡ вәкилдәре беҙҙең ҡарарҙы көтөп баҫып торҙо. Әгәр мәсьәлә ыңғай хәл ителмәй икән, тимәк, был тотош башҡорт халҡының, республикаға үҙаллылыҡ кәрәклеген хуплаған башҡа милләттәрҙең ышанысын аяҡ аҫтына һалып тапау буласаҡ.

Ниһайәт, тулҡынландырғыс та, бер аҙ хәүефле лә таң атты. Башҡорт депутаттарының мөрәжәғәт-ультиматумын төн буйына яҙып, машинкала баҫтырып, БР Юғары Советы рәйесе Мортаза Рәхимов исеменә тапшырҙыҡ. Әммә Хоҙайҙың ҡөҙрәтеме, әллә беҙҙең, башҡорттарҙың, көсөн күрепме, тауыш биреү башланғас, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеү мәсьәләһе бер генә ҡаршы тауыш менән ыңғай хәл ителде. Бында ул ваҡыттағы 21-се трестың генераль директоры Старцев Михаил Гавриловичтың һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең республиканың үҙаллылығын яҡлап һәм башҡа милләт вәкилдәренән булған депутаттарҙы ыңғай тауыш бирергә саҡырып өндәүе лә үҙ ролен уйнаны. Бер аҙ һуңынанраҡ Башҡортостандың беренсе Президентын һайлау мәсьәләһе һәм башҡа көнүҙәк мәсьәләләр ҡалҡып сыҡты, һәм халыҡтың берҙәмлеге, көслө рухы, ышанысы ярҙамында барыһы ла беҙ теләгәнсә хәл ителде. Бөгөнгө күҙлектән сығып баһа биргәндә, ул замандарҙа депутаттар ысын мәғәнәһендә халыҡ хеҙмәтсеһе, халыҡ ихтыярын сағылдырыусы вәкил, хатта халыҡ ихтыяжы үтәлмәгән осраҡта мандаттарынан баш тартырға әҙер кешеләр ине. Бөгөн иһә, төрлө кимәлдәге депутаттар ғына түгел, төрлө кимәлдәге етәкселәр менән халыҡ араһы ныҡ алыҫлашты. Халыҡ, милләт мәнфәғәтен хәстәрләүсе юҡ, һәр кем үҙ ихтыяжын, үҙ кеҫәһен, үҙ креслоһын ғына ҡайғырта. Шуныһы бик ҡыҙғаныс.

*Күптән түгел генә Шаран районының йылан ырыуы башҡорттары үҙ йыйынын уҙғарҙы. Тәүҙә улар асылып китеп һөйләшергә тартынып, баҙабыраҡ ҡалды. Шунан беҙ: "Башҡорттар әҙәби телдә генә һөйләшмәй бит, уларҙың диалекттары һәм һөйләштәре күп. Һеҙ с менән һөйләшһәгеҙ ҙә, тамырҙарығыҙ йылан ырыуы башҡорттарына барып тоташа..."- тигәс, ихласланып, асылып киттеләр. Тел критерийы буйынса ғына милләтте билдәләү ярамай һәм был хаталы ҡараш. Шул уҡ Башҡортостанда татар тип йөрөтөлгән халыҡты Татарстанға алып барһаҡ, уларға "Һеҙ - башҡорттар" тип әйтәсәктәр. Быны менән шуны әйтергә теләйем: башҡортлоҡто аңлау, асылыңа ҡайтыу, милләтеңде таныу өсөн ырыуҙар йыйындары һәм шәжәрәләр төҙөү бик ҙур әһәмиәткә эйә.*

### Ырыуҙар аша - хаҡ асылыңа

Заманында юрматылар башлаған һәм Булат Рафиҡов тырышлығы менән күп райондарҙа хуплау тапҡан ырыуҙар хәрәкәте эше бер ваҡыт туҡтап ҡалды. Ҡайһы берәүҙәр был хәрәкәтте **трайбализм**? тип нарыҡлаһа ла, ваҡыт уның хаҡ тамырҙарына, асылыңа ҡайтыуҙың иң дөрөҫ юлдарының береһе икәнлеген раҫланы. Шуға ла әле Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының урындағы бүлексәләре ярҙамында барлыҡ төбәктәрҙә ырыуҙар йыйындарын уҙғарабыҙ. Әҙәби башҡорт теле уҡытылған һәм әҙәби башҡорт телендә һөйләшеүсе милләттәштәребеҙ йәшәгән райондарҙа бындай йыйындар даими уҙғарылып торһа ла, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшкән һәм оҙаҡ йылдар мәктәптәрендә татар теле уҡытылған төньяҡ, төньяҡ-көнбайыш, көнбайыш райондары башҡорттары ла уҙған быуаттың 90-сы йылдарынан һуң яйлап үҙ асылына ҡайта башланы. Күптән түгел генә Шаран районының йылан ырыуы башҡорттары үҙ йыйынын уҙғарҙы. Тәүҙә улар асылып китеп һөйләшергә тартынып, баҙабыраҡ ҡалды. Шунан беҙ: "Башҡорттар әҙәби телдә генә һөйләшмәй бит, уларҙың диалекттары һәм һөйләштәре күп. Мәҫәлән, күптәр *-тар, -тәр, -ҙар, -ҙәр* ялғауҙары урынына *-лар, -ләр* ялғауы ҡушып һөйләшә. Әйле башҡорттары *ж* хәрефе менән *жәй, жите,* тип һөйләй, мендәр *һ* урынына *ç* хәрефен ҡуллана. Ә һеҙ *с* менән һөйләшһәгеҙ ҙә, тамырҙарығыҙ йылан ырыуы башҡорттарына барып тоташа..."- тигәс, ихласланып, асылып киттеләр. Тел критерийы буйынса ғына милләтте билдәләү ярамай һәм был хаталы ҡараш. Шул уҡ Башҡортостанда татар тип йөрөтөлгән халыҡты Татарстанға алып барһаҡ, уларға "Һеҙ - башҡорттар" тип әйтәсәктәр. Быны менән шуны әйтергә теләйем: башҡортлоҡто аңлау, асылыңа ҡайтыу, милләтеңде таныу өсөн ырыуҙар йыйындары һәм шәжәрәләр төҙөү бик ҙур әһәмиәткә эйә.

### Ырыуҙар ташы Торатауҙа торасаҡ

Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙғарылған көндәрҙә Торатау тауы итәгендә Ырыуҙар ташы монументаль һәйкәле ҡуйыласаҡ урынға таш һалынғайны. Инде бына өс йыл ваҡыт уҙһа ла, төрлө ойошмаларға, республика етәкселегенә мөрәжәғәт итеп тә файҙа сыҡмағас, ошо ырыуҙар йыйындарында был һәйкәл өсөн аҡса йыйыу мәсьәләһе буйынса халыҡҡа мөрәжәғәт иткәйнек. Әйле башҡорттары үҙ йыйындарында уны хуплап ҡаршы алды һәм бөгөн махсус иҫәп асылып, унда халыҡтан күсерелгән иғәнәләр йыйыла башланы. Тарих, ысынлап та, ҡабатлана. Заманында башҡорттар үҙ аҡсаһына Ырымбурҙа Каруанһарай бинаһын төҙөтһә, ошо юл менән Ырыуҙар ташы комплексын аса алһаҡ, башҡорт халҡы тарихҡа үҙенә һәйкәл ҡуйған берҙән-бер милләт булып инәсәк. Һуңғы ваҡытта башҡорттарҙы ойоуҙа, ғәмһеҙлектә ғәйепләһәләр ҙә, кәрәк саҡта ул һә тигәнсе тупланып, берҙәмгә әйләнә ала.

✓ *Ошо урында үҙебеҙҙең йолалар, традицияларға, халыҡ педагогикаһы алымдарына мөрәжәғәт итеүҙән дә яҡшырағы булмаҫ, тип, Ҡоролтай башланғысында Аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр хәрәкәттәрен тергеҙергә ҡарар иттек.*

# Ышанам, хеҙмәт итәм

Әле лә кем күпме аҡса күсерә ала, барыһы ла ярҙам ҡулы һуҙырға тырыша. Белорет районында үткән ҡыпсаҡтарҙың йыйынында ошо хаҡта сәнхәнән белдереү яһағас, халыҡ шунда уҡ аҡса йыя ла башлаған. Һуңынан ундағы аҡсаларҙы беҙҙең иҫәпкә күсереп тә ҡуйҙылар. Әлегә һәйкәлдең проекты әҙерләнгән. Һәйкәл ташына барлыҡ ырыуҙарҙың да исемдәре яҙылып, тамғалары ҡуйыласаҡ. Һәйкәл янында мәсет тә, кафе ла, заправка станцияһы ла буласаҡ, тип күҙаллайбыҙ. Иң мөһиме - халыҡ ярҙамы менән был эште лә аҙағына еткерербеҙ тип ышанам.

## Ололар һүҙе - аҡылдың үҙе

Бөгөн йәштәребеҙ күберәк заманса технологиялар менән эш итә, шуға ла улар оло быуынға ҡарағанда үҙҙәрен белемлерәк, аҡыллыраҡ итеп күрһәтергә ярата. Ләкин улар ни тиклем генә белемле булмаһын, быуаттар буйы тупланған, быуындан-быуынға тапшырыла килгән ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар, аҡыл, тормош тәжрибәһе, донъя ғилеме барыбер ҙә ололарҙа, уларҙың хәтер һандығында, ҡанында һаҡлана. Райондарға, ауылдарға сығып, халыҡ менән аралашҡанда ошо хәҡиҡәтте тағы ла нығыраҡ төшөнәһең. Хатта ябай ғына кеше лә ғүмерҙә уйламаған бөйөк фекер әйтеп ҡуя. Ысынлап та, яуабын табыуы ауыр булған һорауҙар күп бөгөн. Йәштәрҙе нисек тәрбиәләргә, нисек заман афәттәренән йолоп ҡалырға, тип баш ватабыҙ. Көнитмешебеҙҙе нисек ҡорорға, нисек итеп заман үҙгәрештәренә яраҡлашырға белмәйенсә киткән ваҡыттар ҙа күп. Ошо урында үҙебеҙҙең йолалар, традицияларға, халыҡ педагогикаһы алымдарына мөрәжәғәт итеүҙән дә яҡшырағы булмаҫ, тип, Ҡоролтай башланғысында Аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр хәрәкәттәрен тергеҙергә ҡарар иттек. Уларҙың эшмәкәрлеге ниндәй юҫыҡта алып барылырға тейешлеге билдәләнгән положение эшләнек.

Күҙаллауыбыҙса, бындай ойошмалар һәр ауылда булдырылып, аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр бар тәрбиә мәсьәләләрен үҙ ҡулына алырға тейеш. Бөгөн ауылда йәштәрҙе һәм балаларҙы тәрбиәләү, ғаиләне мөхитен сәләмәтләндереү буйынса проблемалар бар. Эшһеҙлек, тип ҡул ҡаушырыуҙар, ҡыҙҙар юҡ, тип өйләнмәй ултырыуҙар йышайҙы. Ауыл урамдарындағы таҙалыҡ, бөхтәлек, тирә-яҡ мөхит, тәбиғәт мәсьәләләре буйынса ла иғтибар үҙгәренә алыр етешһеҙлектәр тулып ята. Ошо проблемалар менән ағинәйҙәр һәм аҡһаһалдарҙан башҡа кем көрәшә ала? Улар өсөн яңы бурыс түгел былар, ә төп бурысын иҫкә төшөрөү, яңынан ҡайтарыу ғына. Элек бит беҙҙе ғаилә йә мәктәп кенә түгел, ә урам да тәрбиәләне, тибеҙ икән, беҙ тап ана шул аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр тәрбиәһенән куҙҙә тотабыҙ ҙа инде. Әлеге ваҡытта Урал арьяғы райондарында Ағинәйҙәр хәрәкәте бик көслө. Уйлап ҡараһаң, башҡорттарҙа элек-электән ғаилә, дәүләт именлегә ҡатын-ҡыҙҙар иңендә ятҡан. Ир-ат һәр ваҡыт хәрби походтарҙа, оҙаҡ йылдар хәрби хеҙмәттә йөрөгән, шул саҡта донъя йөгөн ҡатын-ҡыҙ һөйрәгән. Һәм бары тик гүзәл заттың аҡылы, түҙемлеге, сабырлығы, итәк тултырып балалар табып үҫтерер ныҡлы сәләмәтлеге арҡаһында донъя алға барған. Бөгөн ата -улды, инә - ҡыҙҙы белмәгән заманда тап ошо аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәрҙең тәрән, төплө аҡылына мохтажлығыбыҙ ныҡ һиҙелә...

## Тормош матур! Стакан төбө аша ҡарамаһаң...

Әлеге ваҡытта республикала ғына түгел, тотош Рәсәйҙә популярлыҡ яулай барған "Айыҡ ауыл" конкурсы ла ҡасандар тап Әбйәлил ағинәйҙәре инициативаһы менән башланғайны. Артабан уны алдынғы ҡарашлы йәштәребеҙ күтәреп алды. Быйыл икенсе тапҡыр иғлан ителгән бәйгелә ҡатнашыуға 80 ғариза килде. Бында шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: былтыр енеү яулаған ауылдар махсус рәүештә быйыл конкурста ҡатнашмай, әммә был уларҙың ҡабат элекке тормошҡа ҡайтыуын аңлатмай. Бары тик улар хәҙер инде үҙҙәренең көсөн аңлап, башҡаларға юл бирә.

Был конкурс нимәһе менән әһәмиәтле? Әйе, эскелек кәмей, ауылдар төҙөкләнә, халыҡтың күҙе асыла, йәштәр араһында айыҡлыҡ модаға әйләнә бар хәҙер. Әммә "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте башлаған был проекты тәүҙә республика Хөкүмәте етди ҡабул итмәне. Ә халыҡ уны дәррәү күтәреп алды һәм ошо берҙәмлек республика етәкселеген дә уйланырға мәжбүр итте, күрәһең. Һә-ҙәмтәлә, оҙаҡ ваҡыт үҙ сиратын көтөп ятҡан конкурс положениеһына быйыл ғына ҡултамға һалынып, ул хәҙер Хөкүмәт кимәлен-дәге рәсми конкурс статуҫын алды. Был конкурс-хәрәкәт өҫтән күрһәтмә буйынса төшөрөлөп, күҙ буяу өсөн генә уҙғарылмай, киреһенсә, халыҡ инициативаһы булараҡ, юғарылағыларҙы уйланырға, ҡыбырларға мәжбүр итә.

Командировкаларға сыҡҡанда иғтибарлап ҡарап йөрөйөм, хәҙер барыбер ҙә эскән кешеләр күҙгә бик салынып бармай. Булғандары ла, нисектер тартынып, оялып, ҡыйынынып, ситкә китеү яғын ҡарай. Бер заман табындар түренә иң элек аҡбаш ултыртыу ғәҙәте йышайып китһә, хәҙер уны ҡуйыр алдынан килеп, шым ғына рөхсәт һорайҙар. Юҡ, тиһәң, башҡаса һүҙ ҡуҙғатып тормайҙар. Тимәк, йылап ҡына булһа ла көсләп индерелгән алама ғәҙәттән арыныу юлындабыҙ.

## Үҙидаралыҡтарҙың тос эшмәкәрлеге

Ауылдарыбыҙҙа күҙәтелгән һуңғы ваҡиғалар, бигерәк тә бәләкәй ауылдарҙың үҙ көстәре менән "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", Шәжәрә байрамдары ойоштороуы халҡыбыҙҙың яңы күтәрелеш этабына етеүен, уның рухиәте үҫеүен күрһәтте. Милләттәштәребеҙ үҙҙәре өсөн кемдендер килеп нимәлер эшләүен көтөп ятмай, хәҙер инициативаны йылап үҙ ҡулына ала бара. Был йәһәттән 131-се "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидаралыҡты ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында"ғы Федераль Законның 27-се статьяһына ярашлы, урындарҙа Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы (Территориальное общественное самоуправление - ТОС - ТЙҮ) ойоштороу үҙен аҡлай. Бер яҡтан, ул ауыл биләмәһе хакимиәттәре тирәһенә аҡһаҡалдар, агинәйҙәр хәрәкәттәрен дә берләштерә, сөнки уларҙың маҡсаттары бер: урындағы әһәмиәткә эйә мәсьәләләр буйынса ҡарарҙар ҡабул итеү һәм уларҙы тормошҡа ашырыу. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта күп райондарҙа халыҡҡа пай ерҙәре бүленмәгән, был мәсьәләне берәмләп күтәрә башлаһаң, етәкселек матур ғына итеп алдаштыра ла ҡуясаҡ. Ә ошо мәсьәләне Үҙидаралыҡ, йәғни халыҡ исеменән күтәргәндә, был инде бөтөнләй икенсе сағылыш табасаҡ. Шулай уҡ көтөүлектәр, бесәнлектәр бүлеү буйынса ла, ауылға юл һалыу, шишмә йәки йылға баштарын тәртиптә тотоу, таҙартыу, яр буйҙарын нығытыу, ауылға ситтән килеүселәрҙе индереү-индермәү, кемгә өй һалырға рөхсәт биреү-бирмәү, мәктәптәрҙе яптырыу-яптырмау, шулай уҡ айыҡ тормош өсөн көрәш һ.б. - былар барыһы ла Үҙидаралыҡтарҙың вәкәләтендә буласаҡ. Ҡыҫҡаһы, бөгөн ауылдарҙы бөтөрөүҙең аҫтыртын сәйәсәте алып барылғанда, уларҙы законға ярашлы, закон нигеҙендә һаҡлап ҡалыуҙың берҙән-бер юлы ул ТЙҮ ойоштороу. ТЙҮ билдәле бер территорияла, мәҫәлән, ниндәйҙер ауыл советы биләмәһе, йәшәүсе граждандарҙың йыйылышы йәки сходында һайлана һәм уставы ошо биләмәнең урындағы үҙидара органында теркәлгән мәлдән ғәмәлдә тип иҫәпләнә.

Рәсәйҙә барлыһы ошондай 16 мең самаһы ойошма теркәлеү үтеп, уларҙың күберәге Волгоград, Архангел, Тверь өлкәләрендә, Краснодар крайында, Марий Иле Республикаһында булһа, Башҡортостанда барлыһы 533 территориаль йәмәғәт үҙидаралығы иҫәпләнеп, шуларҙың өсәүһе генә БР Юстиция министрлығында теркәлеү үткән һәм юридик хоҡуҡҡа эйә. Улар: Ишембай ҡалаһы эргәһендәге "Смаҡай", Сибай ҡалаһы эргәһенәге Төйәләҫ ауылы һәм Белорет ҡалаһындағы ТЙҮ. Был ойошманың Юстиция министрлығында теркәлеү үтеп, тулы юридик хоҡуҡҡа эйә булыуының әһәмиәте шунда: улар Рәсәйҙә булдырылған грантҡа дәғүә итә ала. Ләкин юридик формалағы ойошма йыл һайын дәүләт органдарына барлыҡ отчеттарҙы биреп барырға бурыслы. Был талапты үтәмәй икән - штраф санкциялары ҡаралған. Күптәр тап ошо ҡағыҙ эштәре менән булышыуҙан ҡурҡып, территориаль йәмәғәт үҙидаралығын юридик булмаған формала ғына ойоштороуҙы хуп күрә. Шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: ТЙҮ төҙөп тә, уның эшен тейешле кимәлдә алып барырлыҡ энтузиастар булмағанда, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. Шуға ла бында тәү сиратта үҙенең ере, тәбиғәте, эсәр һыуы, зыяраттарҙа ятҡан ата-бабалары рухының тыныслығы өсөн борсолған, башлаған эштәрен еренә еткерерҙәй кешеләрҙең бергә тупланыуы ла зарур. Халҡыбыҙ араһында ундайҙарҙың булыуы шик тыуҙырмай һәм киләсәктә берҙәм булып, үҙебеҙ хәл итә алған мәсьәләләрҙе бергәләп сисеп, еребеҙгә, телебеҙгә, динебеҙгә, милләтебеҙгә артабан үҫергә шарттарҙы үҙебеҙ тыуҙырырыбыҙға ышанам.



**Әлеге ваҡытта күп райондарҙа халыҡҡа пай ерҙәре бүленмәгән, был мәсьәләне берәмләп күтәрә башлаһаң, етәкселек матур ғына итеп алдаштыра ла ҡуясаҡ. Ә ошо мәсьәләне Үҙидаралыҡ, йәғни халыҡ исеменән күтәргәндә, был инде бөтөнләй икенсе сағылыш табасаҡ. Шулай уҡ көтөүлектәр, бесәнлектәр бүлеү буйынса ла, ауылға юл һалыу, шишмә йәки йылға баштарын тәртиптә тотоу, таҙартыу, яр буйҙарын нығытыу, ауылға ситтән килеүселәрҙе индереү-индермәү, кемгә өй һалырға рөхсәт биреү-бирмәү, мәктәптәрҙе яптырыу-яптырмау, шулай уҡ айыҡ тормош өсөн көрәш һ.б. - былар барыһы ла Үҙидаралыҡтарҙың вәкәләтендә буласаҡ. Ҡыҫҡаһы, бөгөн ауылдарҙы бөтөрөүҙең аҫтыртын сәйәсәте алып барылғанда, уларҙы законға ярашлы, закон нигеҙендә һаҡлап ҡалыуҙың берҙән-бер юлы ул ТЙҮ ойоштороу.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғөмүмән, Румил Аҙнабаев етәкләгән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының эшмәкәрлеге күп яҡлы һәм уларҙың һәр береһе хаҡында ентекләп яҙып бөтөү ҙә мөмкин түгел. Ләкин шуныһы хаҡ - ниндәй генә эшмәкәрлек алып барылмаһын һәм Румил Талғат улы үҙе ниндәй генә вазифа биләмәһен, уның бар хәстәре, бар уйы, бар ҡарашы милләтенә төбәлгән. "Мин, ғөмүмән, халҡыма, уның йәштәренә ышанам. Беҙ, башҡорттар, ниндәй генә ихтилалдар кисерһәк тә, ниндәй генә ауырлыҡтар күрһәк тә һынмаған, бөгөлмәгән һәм бөгөнгә тиклем шул ҡеүәтен һаҡлап ҡала алған халыҡ. Был көс, был ҡеүәт беҙҙең тәрән тамырҙарыбыҙҙан, эскән һыуыбыҙҙан, һулаған һауабыҙҙан һәм тәүге тәпәй баҫҡан изге еребеҙҙән килә. Әгәр еребеҙҙе һаҡлап ҡалабыҙ икән, башҡорттоң ғорур исеме быуаттарҙан-быуаттарға яңғырап торасаҡ әле!" - ти ул ҙур ышаныс менән.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ
яҙып алды.**

***✓ Ир һәм ҡатын булған йәмғиәттә кеше психикаһының сәләмәт булыуы ҙур һорау тыуҙыра. Тәүҙә тәүге мөхәббәт ғазаптарын кисерәләр. Шунан өҫтөнлөк өсөн көрәш майҙанына әүерелгән ғаилә тормошо башлана.***

# "Бөтә ирҙәр ҙә ҡәбәхәт..."

Байгилде МОТАЛЛАП

Фантасмагорик хикәйә




Ағинәйҙәр ҡатарында йөрөгән элекке уҡытыусы, район хакимиәте башлығы урынбаҫары вазифаһынан хаҡлы ялға киткән, белемле һәм уҡымышлы Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы: "Бөтә ирҙәр ҙә ҡәбәхәт", - тигәйне, күк көмбәҙе пәрҙәһе асып китте лә, уның сикһеҙ төпкөлөнән ғәжәйеп тауыш ишетелде:

-Эй, Әҙәм тоҡомо, һынауымды һин күтәрә алманың, ожмахҡа лайыҡ түгелһең. Тағы ла ете быуындан һинә алмашҡа атәстәр килер, ер йөҙөндә өҫтөнлөк итер. Ир ҙә булмаҫ был донъяла, ҡатын да. Шулай хөкөмөм, - зиһенде албырғатырҙай, бар булмышты тетрәндерерҙәй сикһеҙ ғәләмдән килгән был ауаз Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙын тотошлайы менән үҙенә буйһондорҙо, аңын ялмап алды, булмышын һеңгәҙәтте. Ул аңҡайып күккә баҡҡан килеш ҡатып ҡалды. - Быға тиклем ерҙәге илселәремде ир затынан тәғәйенләй килдем. Һин - тәүге ҡатын-ҡыҙ. Ахрызаман тураһында кешеләргә әшкәртеүсе! Ахрызамандан һуң да тормош дауам итәсәк, тик ул бөтөнләй башҡаса, башҡа заттар тормошо буласаҡ. Һинә әмеремде төшөрәм: ҡәрҙәштәреңә шул киләсәк тураһында хәбәр еткер, аҙашҡандарҙы дөрөҫ юлға баҫтыр. Буйһонмағандар ҡылыс аша үтер, ярлыҡау булмаҫ. Тормош сылбыры атәстәргә тапшырыла - камил заттарға!

Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы зиһенен йыя алмай байтаҡ торҙо. Был ни ғиллә: төш булдымы, әллә өнмө? Хәле бөтөп, солан тупһаһына сүгәләне. "Бөтә ирҙәр ҙә ҡәбәхәт" тигән һүҙҙәр ауыҙынан ысҡыныуы булды, шул урында ниҙер үҙгәрҙе, ул үҙен хәҙер бөтөнләй башҡа кеше итеп тоя.

- Әбей, нишләп ултыраһың ул? Ҡобараң осҡан... Юҡ, һине танырлыҡ түгел. Әллә йәшәреп киткәнһең? Ни булды? - болдорға сыҡҡан, яңы ғына ҡәбәхәттәр рәтенә индерелгән бабайы, хафаланып, уға баҡты. Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы болдолоа ла ихлас йылмайҙы. - Ыҫтағарифулла, һинә ни булған? Сихыр ҡағылдымы әллә?

- Хафаланма, Әгзәм, хәл йыйырға ғына ултырғайным, - ҡатынының ағымлы тауышын да ят итте ир.

* * *

Ир-аттың булмышы күберәк тоҡом ҡалдырыуға ынтылыуҙан ғибәрәт. Ә ҡатын-ҡыҙға ышаныслы, көслө, мал табырға булдыҡлы, буласаҡ балаларын, үҙен яҡларҙай, һаҡларҙай берҙән-бер абышҡа кәрәк. Ике енестең был ҡаршылыҡлы ынтылышы, тормошто белеп-тойоуы уларға бер йән булып уҡмашырға юл ҡуймаған ҙур сәбәптәрҙең береһе. Ир менән ҡатын араһында ҡапма-ҡаршылыҡтар, аң менән иҫләп булмаҫтай сетерекле хәлдәр бихисап. Быныһы иһә шуларҙың иң башында торғаны. Бөгөн дә ҡатын кешене иренә ҡарата: "Бөтә ирҙәр ҙә ҡәбәхәт", - тип әйттерергә этәргән сәбәп тырнаҡ осона ла торошло түгел ине. Әгзәм ҡарт ирәйепме, әллә инде сер тотоуҙың кәрәге юҡ, йәшәре йәшәлгән, типме, үҫмер саҡ мөхәббәте тураһында һүҙ башлағайны.

- Ҡара әле, әбей, һин бит минең берҙән-бер мөхәббәтем булмаһың. Ун биш йәшемдә, һигеҙенсе синыфта уҡыған сакта, институт тамамлап, беҙҙең мәктәпкә эшкә килгән химия уҡытыусыһы Флорида Батыр ҡыҙына үлеп ғашиҡ булғайным. Химия кабинеты минең өсөн Мәккәгә әүерелде. Һөйгәнемде бер күреп ҡалыу өсөн йән атып, тәнәфес һайын шул кабинет тирәһендә уралдым. Ул күренһә, йәнем табаныма китә, һушым юйыла, йөҙәнә бағыуҙан күҙҙәрем ҡамаша. Мәктәптән ҡайтам да, иртәгә кире уҡырға барырға ҡалған сәғәттәрҙе, минуттарҙы һанайым. Һинең менән башҡасараҡ булды, - тип хәтирәләргә бирелеп китте.

Вәлимә Мөхәмәтйән ҡыҙы уны ғәжәпләнгән кеүек тыңлап ултырҙы ла:

- Себештәремде үләнгә сығарып ингәйнем, ҡарға алып китеп бармағайы, - тип йәһәтләп урынынан ҡуҙғалды. Өй ишеген япҡас: - Бөтә ирҙәр ҙә ҡәбәхәт, - тине өҫтәп. Был асыулы һүҙҙәрҙе Әгзәм ҡарт ишетмәне, әлбиттә. Теленән уларҙың нисек ысҡынғанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды, ихтыярынан тыш килеп сыҡты. Уйлап та өлгөрмәне. Ғүмере буйы иренә ҡарата оло ихтирам тойғоһо йөрөткән ҡатын, уның ауыҙынан башҡаға мөхәббәт тураһында һүҙ ишеткәс, ирекһеҙҙән, әхирәттәрен әләкләй була әйтте, күрәһең, был һүҙҙәрҙе.

* * *

Океан киңлегендә мөһәбәт аҡ карап сайҡала. Уның бортында пассажирҙармы, әллә берәй йөкмө - ситтән аныҡлау мөмкин түгел. Палубала кеше күренмәй.

Асылда иһә был - заманса ҡорамалдар менән тынҡыслап тултырылған ҡеүәтле ғилми-тикшеренеү лабораторияһы. Уның эшмәкәрлеген донъялағы иң бай магнаттарҙың береһе финанслай, ә етәкселек итеү фәнгә мөкиббән бирелгән, уға Алла урынына табынған генетик Джон Смитҡа тапшырылған. Караптың фәҡәт нейтраль һыуҙарҙа йөҙөп йөрөүенең ғилләһе шунда: ул донъя йөҙөндәге барлыҡ илдәрҙә лә тыйылған эксперименттар үткәрә. Кешенең ДНК кодын үҙгәртеү, уны клонлау өҫтөндә эшләй, гендар кимәлендә тәжрибәләр үткәрә. Был эш Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Конвенцияһы менән тыйылған. Уға ярашлы, һәр дәүләт үҙ ҡануниәттәрен ҡабул иткән.

- Профессор Джон... - етәксенең кабинетына тулҡынланыуҙан теле тотлоҡҡан дежур лаборант йүгереп килеп инде.

- Курт әфәнде, нишләп посыңды ташланың, хәбәрләшер өсөн эске элемтә селтәре бар ҙабаһа...

- Бик ашығыс... Фәҡәт һеҙҙең ҡолағығыҙға ғына төшөрөр хәбәр менән килдем. Яралғы кризис нөктәһен уңышлы үтте. Йөрәге тибә, әллә көлә, әллә илай - йөҙөндә ниндәйҙер кисерештәр билдәһе сағыла.

- Ах, суҡынғыр, мин бит унда булырға тейеш инем был минутта! Ниндәй ғәфү итмәҫлек башбаштаҡлыҡ, шайтан алғыры. Курт, әйткәндәрең раҫ булһа, компания иҫәбенә Канар утрауҙарында бер айлыҡ ял үҙеңә һәм мул ғына премия! О, Бөйөк Генетика, минең ялбарыуҙарымды ҡабул ҡылдың. Мин - гений, мин донъяны юҡтан бар итеүсе Тәңренең үҙе! - Джон Смит лабораторияға уҡталды. Күҙҙәре яна, йөҙөндә ашҡыныу, хәрәкәте теүәл һәм сымыры.

Ул ҡеүәтле компьютерҙар, донъялағы иң оҫта программасылар ярҙамында киләһе заман кешеһенең моделен: уның ниндәй ҡиәфәттә буласағын, төҫфиғелен, йәшәү рәүешен, нәҫел-үрсем һәләтен әллә ҡасан ҡағыҙға төшөрөп ҡуйған. Киләсәктең идеаль заттарын! Шартлы рәүештә "атәс" тип атай уларҙы Смит. "Атай" һәм "әсәй" һүҙҙәренән ҡыҫҡартып алған был исемде. Ғилләһе шунда: атәстәр бер енесле. Ир менән ҡатын булмаясаҡ киләсәктә. Кешелектең эволюцияһы ла шул йүнәлештә бара. Тик тәбиғи юл менән атәстәргә күсеү йөҙәр мең йылға һуҙыласаҡ. Был дәүер эсенә енестәр араһында бер нисә һуғыш ҡуҙалғана, йә ирҙәр, йә ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөнлөк иткән йәмғиәт ҡоролошо бер-береһен алмаштырып торасаҡ. Тарихты моделләгән программа күрһәтеүенсә, йөҙ-йөҙ илле йылдан һуң, торараҡ - тағы ла мең йыл тирәһе үткәс, кешелек юғалыу сигенә барып баҫасаҡ. Юғалып ҡуйыуы ла ихтимал. Компьютер ни тиклем аҡыллы булмаһын, ул бөтә нескәлектәре менән киләсәкте һынландыра алмай. Үҙе үк иҫкәртеп тора: "Яңылышлыҡ коэффициенты фәләнсә һәм фәләнсә". Шул яңылышлыҡҡа төҙәтеү индереп, яңынан иҫәпләгәндә, кешелектең ер йөҙөнән юғалыу сценарийының бер нисә вариантын бирә үҙе үк. Беҙ, йәмғиәтебеҙҙең артабанғы үҫеше атом катастрофаһы, ергә комета төшөүе йә иһә климаттың үҙгәреүе һөҙөмтәһендә туҡталыуы ихтимал, тип уйлайбыҙ. Смиттың аҡыллы иҫәпләү машиналары иһә икенсе сәбәпте күрһәтә. Ул - енестәр араһындағы конфликт. Ғәжәп, был турала бөгөн бер кемдең башына инеп тә сыҡмай. Фәҡәт берләктә донъяны алға һөргән ике йән һуғыш һуҡмағына сыҡһынсәле. Көтөлмәгән сценарий был.

Джон Смит кешелекте ҡотҡарыу өҫтөндә эшләй хәҙер. Уның планы ябай һәм гениаль - әҙәми зат үҫешенең тәбиғи юлын мең тапҡырға ҡыҫҡартыу. Атәстәр расаһы ерҙә бер нисә йөҙ мең йылдан һуң түгел, ә күп тигәндә ете быуын алмашыныуға өҫтөнлөк итәсәк. Ул быға фән, үҙенең зиһен үткерлеге һәм заман технологиялары ярҙамында өлгәшмәксе.

Теорияһын фән ярҙамында иҫбатлаған, уның ғилми базаһын булдырған, тәжрибәләр менән нигеҙләгән. Тик нишләптер тәүге атәс тыуырға ашыҡмай. Геномы үҙгәртелгән яралғының төҫ-ҡиәфәте төҫмөрләнә башлаһа, ул бер килке тырпырап ята ла, хәлһеҙләнеп, һәләк була. Смит иҫәпләүҙәрен, технология процестарының теүәл үтәлешен баштан тикшереп сыға, әммә ләкин бер ниндәй ҙә хата тапмай. Тәжрибәләре менән биш йыл хитлана. Әйтерһең, ваҡыт минаһы һалынған, яралғы үҫешенең билдәле бер нөктәһенә етһә, ул шартлай, хәрәкәтте туҡтата.

Был хәлдең сәбәбен аңларға теләп, Смит, йән инә башлаған төйөрсөктөң ылбырап төшөүен меңәр тапҡыр күҙҙәтте, тик серенә төшөнә алманы. Бөгөн иһә, яҙа башлаған китабына мауығып, донъяһын онотоп ташлаған. Һәм мөғжизә - колбалағы яралғы йәшәйем тип йән атып талпына.

* * *

*Джон Смиттың китабынан өҙөк.*

2163 йыл. Лондонды 150 йылдан һуң мин ошо рәүешле күҙ алдына килтерәм. Мегаполис танымаҫлыҡ булып үҙгәргән. Тарихи урындар: Биг Бен башняһы, Букингем монархтар һарайы, Тауэр күпере һәм бөгөн Лондондың йөҙөн билдәләгән башҡа тарихи ҡоролмалар һаҡланған, ә егерменсе һәм егерме беренсе быуаттарҙа төҙөлгән кварталдар урынында күҙҙең яуын алып торған бүтән ҡала. Бетон, быяла һәм полимер туҡымаларҙан ҡоролған биналар, әйтерһең, һауала эленеп тора. Улар ныҡ һәм ҡулай. Бөтә урында ла тәртип, таҙалыҡ, күҙҙең яуын алыр матурлыҡ.

Иртәнге сәғәттәрҙә халыҡ эркелеп эшкә ағыла. Был ғәжәп күренеш. Сөнки булған эш урындары - офистар, предприятиелар, хеҙмәтләндереү нөктәләре - ҡаланың сите буйлап түңәрәк яһап урынлашҡан. Атәстәрҙең хәрәкәтенән барлыҡҡа килгән һәм төрлө яҡҡа таралған ағым ҡағыҙға төшөрөлгән бала рәсемендәге ҡояшты хәтерләтә. Кискеһен атәстәр кире йүнәлештә хәрәкәт итә. Башҡа ваҡытта ла камил заттар бөгөнгө ҡала кешеләре кеүек урамдарҙа ҡырмыҫҡа иләүендәй мыжғымай. Һәр кемеһенең магазинға, бөҙрәханаға, аптекаға һәм башҡа кәрәкле урындарға йөрөй торған билдәләнгән сәғәттәре һәм маршруты бар. Тик йәмәғәт транспортында ғына йөрөйҙәр, шәхси автомашина тотоу законда ҡаралмаған.

Атәстәр төҫ-ҡиәфәттәре менән күберәк бөгөнгө ҡатын-ҡыҙҙарға тартым. Уларҙың тән төҙөлөшө, бала табыуға һәм уны имеҙеүгә бәйле, нығ үҙгәрмәгән. Ирҙәрҙән ҡарыулыҡ, ҡырыҫлыҡ, тәүәккәллек мираҫҡа алынған. Ябай һәм ҡулай кейем кейәләр. Буяныу-һыланыу кеүек нәмә юҡ. Әгәр урамда буянған, тәнен кипсәләндергән, ниғмәттәрен ярым асып торған күлдәк, бейек үксәле туфли кейгән, сәстәрен ҡабартып бөҙрәләткән атәс күренһә, уны сит планета заты итеп ҡабул итерҙәр ине. Бындай хәлдең булыуы мөмкин түгел, сөнки ул - мәғәнәһеҙлек! Бөгөнгө ҡатын-ҡыҙҙың биҙәнеп-һылыуланыуы, кейенеүе, холоҡ-фиғеле ирҙәргә оҡшарға ынтылыуҙан килә. Атәстәр йәмғиәтендә ир ҙә, ҡатын да булмағас, уның кәрәге лә юҡ. Был әйберҙәр, уларҙы йөрөткән кешеләрҙең тормошо менән музейҙарҙа танышырға мөмкин. Атәстәр үткән замандағы тормоштоң мәғәнәһеҙлегенә, кешенең аңлатып булмай торған йәшәү рәүешенә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың көслө заттарға ярарға тырышып, үҙҙәрен яфалауҙарына хайран ҡала. Ете-һигеҙ сантиметр бейеклегендәге дағалы туфлиҙы нисек кеймәк, уның менән көнө буйы эштә йөрөмәк кәрәк? Был бит тотош ҡан әйләнеше, аяҡтарҙың ҡан тамырҙары, быуындар өсөн зарарлы. Һылашып торған салбар, әсҡе кейем, косметика ла шулай уҡ файҙаға түгел.

Ир һәм ҡатын булған йәмғиәттә кеше психикаһының сәләмәт булыуы ҙур һорау тыуҙыра. Гүргә ингәнсе ике енес бер-береһенең, хәҙергесә әйткәндә, "нервыларында уйнай". Тәүҙә тәүге мөхәббәт ғазаптарын кисерәләр. Шунан өҫтөнлөк өсөн көрәш майҙанына әүерелгән ғаилә тормошо башлана. Ир менән ҡатындың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен асыҡлауы көн һайын булмаһа ла, бик йыш ҡабатланып тора. Сираттағы ғауға йоғонтоһонда йөрөгән кеше эштә бер ни ҙә ырата алмай. Ул хужа икән - тотош коллективтың эшмәкәрлеге көйһөҙләнә, ә ябай хеҙмәткәр була ҡалһа - унан ике-өс көн һөҙөмтә көтмә. Бындай хәл йәмғиәттең үҫешен тотҡарлай, көсөн һәм энергияһын бушҡа сарыф итә.

Атәстәргә иһә даими тотороҡло психика хас. Улар һәр ваҡыт йыйнаҡ, хистәргә, төрлө кисерештәргә бирелеүҙән ситендәр. Шуға күрә киләсәк йәмғиәтенә, бөгөнгө шикелле, кеше факторына бәйле һәләкәттәр, үҙ- үҙенә ҡул һалыу, башҡаның йәнен ҡыйыу кеүек күренештәр ят.

Был трактатым менән танышыусы баштан уҡ иң мөһим һорауға яуап алғыны килеүен белеп торам. Атәстәр нисек балаға уҙа, уны таба һәм тәрбиәләй?

Балаға уҙыу аталаныуһыҙ атҡарыла. Фәндә был партеногенез булараҡ билдәле. Тәбиғәттә был күренеште кеҫәрткеләр, балыҡтар һәм хатта ҡоштар араһында ла осратырға мөмкин. Мин, эйе, фәҡәт мин, кешенең геномын үҙгәртеүгә өлгәштем һәм атәстәр расаһының ергә килеүен тиҙләттем. Енси йәһәттән атәстәр 25 - 27 йәштә өлгөрә. Беҙ, ҡәҙимге кешеләр, буй еткерәбеҙ, 14 - 15 йәштә, асылда, үрсем бирергә һәләтлебеҙ. Ләкин социаль хәлебеҙ ата-әсә булыу өсөн ҡамасаулыҡ булып тора. Атәстәрҙең енси өлгөрөүен дә ошо йәһәттән сығып билдәләнем. Эйе, билдәләнем, үҙем билдәләнем һәм программаға һалдым! Атәс белем алып, һөнәре буйынса ике-өс йыл эшләп алырға тейеш. Сөнки бала тыуҙырғанға тиклем уның үҙенең мөйөшө, социаль страховкаһы булыуы мотлаҡ. Буласаҡ йәмғиәттә атәстәр эшкә сыҡҡан көндә үк фатир ала һәм һәр яҡтан ҡурсаланған була. Эшсе көс булараҡ, ул - йәмғиәттең нигеҙ ташы, тотҡаһы, иң ҙур байлығы. Бөгөнгө кеүек - нефть та, алтын да, аҫыл таштар ҙа түгел. Фәҡәт - зиһен, белем, һөнәр һәм тәжрибә эйәһе булған атәс - иң оло ҡиммәт.

Шулай итеп, егерме бишегерме ете йәштә атәстәр балаға уҙа. Теләһәләр ҙә, теләмәһәләр ҙә. Был - физиологик процесс. Билдәле бер мәлдә һөт тештәре төшкән, ир-егеттәргә мыйыҡ-һаҡал үҫә башлаған кеүек. Законда билдәләнеүенсә, тәүге баланы атәс мотлаҡ табырға тейеш. Баланы төшөрөү ҡәтғи тыйыла. Икенсе балаһынан баш тартырға, яралғының үҫешен туҡтатырға - аборт яһатырға рөхсәт ителгән. Икенсе тапҡыр балаға атәс биш-алты йылдан һуң уҙа. Өсөнсө баланы табыу ҙа мотлаҡ. Артабанғы түллек атәстең үҙ ҡарамағында. Үҙ ғүмерендә ул иң күбендә алты тапҡыр балаға уҙыу һәләтенә эйә. Кешеләр араһында иң күп балаға уҙыусылар араһында беренселектә минең яҡташым Элизабет Гринхилл тора. Ул 38 тапҡыр бала тыуҙыра. Атәстарға көстө был рәүешле исрафлау кәрәкмәгән йомартлыҡ булыр ине. Киләсәк йәмғиәттең демографик яҡтан тотороҡло булыуы ла мотлаҡ. Халыҡ һаны артыҡ та, кәм дә булырға тейеш түгел.

Тәрбиә эше әлеге замандағынан күпкә айырылмай. Бала йәмғиәттә йәшәргә, уның ҡанундарын ихтирам итергә өйрәнергә, белем һәм һөнәр алырға, яуаплы һәм тырыш булып үҫеп етергә тейеш.

Атәстәр тыныс холоҡло, үтә яуаплы, итәғәтле һәм намыҫлылар. Уларҙың йәмғиәтендә талаш-тартыш, ғәйбәт, кенә ҡыуыу, хөсәт, шәһүәт, монафиҡлыҡ бөтөнләй юҡ.

Мин атәстәр йәмғиәтенең Ҡош юлы галактикаһында урынлашҡан Альфа-Центавра йондоҙлоғона сәйәхәт ҡылыу проекты өҫтөндә эшләгән осорон тасуир итәм. Был оло эштең асылы - йәшәү өсөн ҡулайлы яңы планета табыу һәм киләсәктә шунда күсенеү. Сөнки таҫы ла биш-алты быуаттан һуң ерҙең тәбиғи ресурстары тамам сарыф ителәсәк...".

(Дауамы бар).

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

# КОНКУРСТЫҢ ҺӨҘӨМТӘҺЕ ШУЛ:

## артабан айыҡ быуындар китәсәк

**"Ауылда спиртлы эсемлек менән мауығыусылар һаны йылдан-йыл аҙая, айыҡлыҡ, сәләмәтлек модаға инә бара..." "Айыҡ ауыл - 2013" республика конкурсында ҡатнашыусы ауылдар вәкилдәренең Ҡырмыҫҡалы районы Тауһеңгер ауылы янында үткән слетында аҙым һайын шулай тип ҡабатланылар. "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте менән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡатнашлығында ойошторолған слетҡа республикабыҙ райондарынан ҡырҡҡа яҡын делегация, Санкт-Петербург, Татарстан, Удмурт республикаларынан, Силәбе өлкәһенән айыҡлыҡты пропагандалаусы ойошмалар вәкилдәре килгәйне.**

Бөгөнгө виртуаль аралашыуға күберәк өҫтөнлөк бирелгән заманда бер-нисә кешене бер урынға махсус рәүештә саҡырыу еңел булмаған эш, тиһәң дә була. Был йәһәттән иңдәренә ҙур йөк күтәргән был йәш егеттәрҙең - "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте рәйестәштәре Ринат Зәйнуллин, Роберт Дәүләтшин һәм Марат Абдуллиндарҙың энтузиазмына хайран ҡалырлыҡ. Был йыйынға улар конкурста ҡатнашыусыларҙы ғына түгел, ә Санкт-Петербург дәүләт аграр университеты ректоры, публицист Виктор Ефимовты ла ылыҡтырып килтергәйне. Профессор менән аралашыу бер-нисә сәғәткә һуҙылды. Төньяҡ баш ҡаланан килгән ҡунаҡ үҙенең айыҡлыҡ өсөн көрәш тәжрибәһе, уңышлы кеше булыу серҙәре, ваҡытты дөрөҫ файҙаланыу тураһындағы ғәйәт ҡыҙыҡлы фекерҙәре менән уртаҡлашты, форумда ҡатнашыусыларҙың һорауҙарына яуап бирҙе.

Татарстандың Яр-Саллы ҡалаһынан килгән волонтерҙар тап ошо ғалимдың сығышын тыңлар өсөн юлға сыҡҡан икән. Улар ҙа буш ҡул менән килмәгән булып сыҡты - ҡулдан-ҡулға тапшырылып, бик алыҫтарға таралыу мөмкинлегенә эйә "Изгелек карта"ларын өләште. Был проект буйынса, ҡулында картаһы булған кеше кемгәләр ярҙам итә лә, ярҙам иткән кешеһенә картаһын тоттора, ә хеҙмәте өсөн аҡса алмай. Ҡулына карта килеп эләккәне иһә, интернеттағы махсус сайтта карта ярҙамында теркәлә һәм тағы бер кешегә изгелек ҡылып, картаһын шул кешегә тапшыра. Тегеһе лә ошо операцияларҙы ҡабатларға тейеш була. Ойоштороусылар билдәләүенсә, ҡасандыр һинең ҡулыңдан үткән картаның ҡайҙарға барып юлыҡҡанын интернеттан күҙәтеү мөмкинлеге бар һәм һинең изгелегеңдең, Ер шарын урап сығып, кире үҙеңә килеп эләгеүен күрергә лә мөмкин.

Роберт Дәүләтшин әйтеүенсә, "Айыҡ Башҡортостан - 2013" конкурсының һөҙөмтәләре лә тап ошо "Изгелек карта"һыныҡы кеүек булаҫаҡ: артабан тотош бер айыҡ быуын үҫеп сығаҫаҡ. Быйылғы конкурста ҡатнашыусыларҙың төп маҡсаты ла ошо инде. Артабан слетта ҡатнашыусы бер-нисә кешенең айыҡлыҡ хәрәкәтенә нисек ҡушылып китеүҙәренән башлап, ниндәй ҡаршылыҡтарға юлыҡыуҙарына тиклемге бер-нисә фекерен килтермәксебеҙ.

**Илдус ФӘЙҮРШИН, эшҡыуар, Борай районы Борай ауылы:** Мин ауылыбыҙҙа сауҙа нөктәһе асып, аҙыҡ-түлек, хужалыҡ, көнкүреш тауарҙары, төҙөлөш материалдары менән ауыл халҡын тәьмин итеүсе шәхси эшҡыуармын. Йәшерен-батырыны юҡ, ҡасандыр кәштәмдә спиртлы эсемлектәр ҙә бар ине һәм уларҙы һатыуҙан килем дә ала инем. Ваҡытында дин юлына баҫып, был харам эштән - спиртлы эсемлектәр һатыуҙан тыйылып ҡалдым. Минең һүҙҙе тыңлап, тағы ике эшҡыуар ауылдаш та "йәшел йылан" менән сауҙа итеүенән туҡтаны. Ярай әле шулай иткәнбеҙ, юҡһа, ауылыбыҙҙың былай ҙа ҡаҡшаған демографияһына тағы ла көслөрәк зыян килер ине.

Ә демографик хәл, ысынында, әле лә шәптән түгел: районда бер тыуымға ике үлем тура килә, халыҡтың уртаса йәше лә республика менән сағыштырғанда күпкә олораҡ - был оло йәштәгеләрҙең балаларға ҡарағанда күберәк булыуы тураһында һөйләй. Һуңғы йылдарҙа йәштәребеҙ ғаилә ҡормай, ҡорғандары ла балалар һанын ишәйтергә ашыҡмай. Күптән түгел бер танышым: "Икенсегә бала планлаштырмайбыҙ инде, минең ул тиклем эсеүҙән балабыҙ йә зәғиф, йә ауырыу булып тыуыр тип ҡурҡыта", - тине. Был егет - 35 йәштәр самаһындағы уңышлы эшҡыуар, кем әйтмешләй, мәҙәни эсергә яратыусы. Эшҡыуар булғас, партнерҙар менән килешер өсөн мотлаҡ спиртлы эсемлек эсеп, табын артында һөйләшергә кәрәк, тигән принцип менән эшләй. Күреп торһығыҙ, ул үҙенең һау балаға ғүмер бирә алырына ла ышанмай. Әйткәндәй, күп эсеүҙе тыйып, шул уҡ ваҡытта мәҙәни эсеүҙе альтернатив вариантҡа иҫәпләп, ҙур хата яһаны хөкүмәтебеҙ. Бөтөнләй эсмәй йәшәү ҙә мөмкин булыу вариантын төшөрөп ҡалдырҙылар һәм һөҙөмтә - күҙ алдында. Килеп тыуған ситуация бер мине генә хафаға һалмай. Ауылыбыҙҙа сәләмәт тормош яҡлылар менән "Айыҡ Борай" хәрәкәтенә нигеҙ һалдыҡ, хәҙергә көндә төрлө ауылдарға, уларҙың мәктәптәренә йөрөп, алкоголдең зарары, айыҡлыҡтың файҙаһы тураһында телмәрҙәр тотабыҙ.

**Виктор ЕФИМОВ, Санкт-Петербург дәүләт аграр университеты ректоры:** Айыҡ ауылдар - беҙҙең киләсәктең нигеҙе икәнен, ауылда тыуып үҫкән кеше булараҡ, мин бик яҡшы аңлайым. Бөгөн минең тыуған Псков өлкәһендә лә эскелек тигән "йәшел йылан" халыҡты аяҡтан йыҡҡан. Ундағы хәл әле булһа ыңғайға үҙгәрмәй. Заманында индеецтарҙы бер нисек тә еңә алмағас, уларҙың ерҙәрен баҫып алыусылар шарап һәм спирт ҡыуа торған аппараттар килтергән ише, бөгөн дә Рәсәйҙе шулай һындырырға маташалар, стаканһыҙ Ванька - Ванька түгел инде, тигән ялған идеяны үҫтерергә теләйҙәр.

Айыҡлыҡ хәрәкәтен йәштәр башлауы ҡыуандыра. Оло быуын вәкилдәренең күбеһе бирешкән инде, ә бына мин меңләгән йәш кешенең бер ваҡытта ла спиртлы эсемлек уртламаҫын беләм һәм шундай йәштәр һеҙҙә лә барлығын күреп ҡыуандым. Тап ошондай йәштәр беҙҙең өр-яңы кадрҙар базаһын барлыҡҡа килтерә лә инде. Шулай ҙа айыҡлыҡ - әле ярты маҡсат ҡына, ә тағы ла аңлылыҡ һәм Алла ҡушҡанса йәшәргә ынтылыу кәрәк. Беҙ үҙебеҙҙе йыш ҡына был донъяла иң аҡыллы, иң аңлы йән эйәләре итеп хис итәбеҙ. Дөрөҫмө был? Ҡара тупраҡта елберләп кенә үҫеп ултырған йәшел үлән үҙ донъяһына хозурланып йәшәп ятҡанда уны бер кәзә мыртылдатып ашап киткән хәлдә, кәзә тураһында үлән ни белә икән? Моғайын, бер ни ҙә. Беҙ ҙә, үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ҡайнап, бөйөклөгөбөҙ тураһында бер туҡтауһыҙ таҡылдап, үҙебеҙҙән дә юғарыраҡ көс барлығы тураһында онотоға тейеш түгелбеҙҙер. Ул сағында йәшәйешебеҙ ҙә дөрөҫ юлдан тайпылмаҫ. Миңә бер мәлдә никотинына ҡатып бөткән бер оло ғына танышымды тәмәкеһенән арындырырға тура килде. Мин уға былай тинем: "Әйт әле, һиңә ошо ағыу еҫкәгәнең өсөн тәмәке етештереүселәр күпме аҡса түләй?" Әңгәмәсем аптырап, ниңә ундай һорау биреүем менән ҡыҙыҡһынды. "Һуң тараҡандарҙы ағыулаған ваҡытта улар беҙгә алдан аҡса түләп ҡуймай бит, ә һин - түләйһең. Киреһенсә, һинең һаулығыңа зыян килтергәне өсөн тәмәке магнаты һиңә аҡса биреп торорға тейеш", - тинем. Сағыштырыуым тәмәке тартып, ярты ғүмерен үткәргән тиҫтеремә шул тиклем ныҡ тәьҫир итте - ул шунда уҡ кеҫәһендә ятҡан бер ҡап тәмәкеһен суп-сар һауытына ырғытты. Күпме йылдар үтте, ә ул миңә һаман рәхмәт уҡып китә. Араҡынан арындырыр өсөн дә ошондай тәнҡитһеҙ, шулай ҙа әсе генә төрттөрөп ала торған миҫалдар менән ҡоралланыу ҡамасауламаҫ ине.

**Илһам ИМАЕВ, Иглин районы Үктәй ауылы биләмәһе башлығы:** "Айыҡ ауыл- 2013" республика конкурсында ҡатнашырға тәҡдим иткәстәр, Өфөлә 11 мартта үткән тәүге ойоштороу комитеты ултырышына килдем һәм унда билдәле профессор Ждановтың сығышын тыңланым. Уның һүҙҙәре шул хәтлем ныҡ тәьҫир итте, мин, быға тиклем байрамдарҙа һыра-маҙар уртлаштырған кеше, ҡайтҡас, алкоголдән бөтөнләй баш тарттым һәм дуҫтарыма был турала иғлан иттем. Тиҙ арала ауылда эшләүсе үҙем һымаҡ йәш хеҙмәткәрҙәрҙе йыйып, улар менән кәңәшләшеп, конкурста ҡатнашыу-ҡатнашмау мәсьәләһен ыңғай хәл иттек. Артабан ауыл аҡһаҡалдарын саҡырып, уларға үҙебеҙҙең ниәтебеҙҙе еткерҙек. Ни тиһәң дә, ауыл халҡы улар һүҙенә ныҡыраҡ ҡолаҡ һалыусан. Оло йәштәге ауылдаштар араһында ла, йәштәр араһында ла айыҡлыҡҡа бер аҙ сәйерһенеп ҡараусылар булды. Конкурста ҡатнашырға теләк белдергәс, ҡайһы бер ауылдаштар мине магазиндарҙағы алкоголле эсемлектәрҙе ҡырып-һепереп түгер, тип көттө. Ә беҙ һөҙөмтәлерәк юлды - һөйләшеүҙәр юлын һайланыҡ. Айыҡ тормош алып барған бер-нисә иптәш егет менән урамдамы, башҡа урындамы эскән кешене осратһаҡ, тәнҡитләмәй, ҡаты бәрелеп күңелен һындырмай ғына аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Дуғаны ла әкрен генә бөгәләр. Спиртлы эсемлек менән һатыу итеүсе магазиндар хужалары менән дә гел был турала һөйләшә торғас, магазиндарыбыҙҙа спиртлы эсемлектәр һатыу ҡыҫҡарҙы. Хәйер, эсмәгәс, ул спиртлы эсемлектәр минең күҙемә лә салынмай, уларҙың кәштәләрҙә булыу-булмауына иғтибар ҙа итмәйем. Беҙҙең маҡсат - халҡыбыҙ аңына ошо психологияны, "йәшел йылан"ды һанламау, уны күҙгә лә элмәү психологияһын һеңдереү.

Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.

✓ *Ғәрәпсә таныһандар "Әхмәтбаҡый әүлиә гүр эйәһе булды", тип, ап-асыҡ итеп яҙылған яҙыуҙы уҡый һәм бөтә әҙәм эшен шыпа туҡтатып, Әхмәтбаҡый әүлиәне һуңғы юлға оҙатырға килә.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТАБИП УРЫНЫНА... компьютер

■ Ас көйөнсә мөһим ҡарарҙар ҡабул итергә ярамай, тип раҫлай Макс Планка институты ғалимдары. Улар фекеренсә, асығыу тойғоһо кешене уйланылмаған ҡабалан аҙымдарға этәреүе ихтимал. Баҡтиһәң, ашҡаҙан буш ваҡытта ҡарар ҡабул итеүгә баш мейеһенең бөтөнләй икенсе өлөшө яуап бирә икән. Ғалимдар емеш-еләк себенендә тәжрибә үткәреп ҡараған һәм ас ваҡытта хәүефкә барыу механизмы эшләүен асыҡлаған. Ваҡ себендәр инстинктив рәүештә углекислый газдан ҡурҡа, әммә асыҡҡан мәлдәрендә улар газға ҡарамайынса аҙыҡҡа яҡынлаша. Ғалимдар фекеренсә, был нервылар системаһының ике өлөшөнөң компромисы һөҙөмтәһе, бындай компромисҡа кешенең нервылар системаһы ла һәләтле.

■ Англияла үткәрелгән һорау алыуҙарға ышанһаң, тышҡы матурлыҡтың бөтөн күрһәткестәре буйынса 30 йәштән өлкәнерәк ҡатын-ҡыҙҙар йәш ҡыҙҙарҙы күпкә үтеп китә. Тикшереңеү авторҙары әйтеүенсә, "матурлыҡ" төшөнсәһенә үҙенде башҡаларға дөрөҫ күрһәтә белеү, шулай уҡ аҡыл, холоҡ инә. Респонденттарҙың 70 проценты был исемлеккә ҡатын-ҡыҙҙың үҙенә булған ышанысын өҫтәй. Уларҙың 46 проценты матурлыҡты матур кейенә белеүҙә, тип иҫәпләй. Әйткәндәй, һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың 65 проценты билдәләүенсә, йәш өлкәнәйә барыу менән улар тирә-йүндәге кешеләрҙең уларҙың тышҡы ҡиәфәте тураһындағы фекеренә ҡолаҡ һалыуҙан туҡтай, сөнки үҙҙәрен күпкә ышаныслыраҡ тоя һәм үҙҙәренең матурлығын һаҡлай белә.

■ Мәскәү дауаханаларында махсус компьютер системаһы медикаменттар тәғәйенләй башлаясаҡ. Берҙәм медицина мәғлүмәти-аналитик система (ЕМИАС) төрлө йүнәлештә эшләгән табиптарҙың бер-береһенең ҡарарын иҫәпкә алыуын һәм препараттарҙы дөрөҫ тәғәйенләүен күҙәтергә тейеш. Мәҫәлән, ул дарыуҙарҙың функцияһы һәм тәғәйенләнеше буйынса бер-береһен ҡабатламауына, бер юлы бер нисә дарыу ҡулланғанда аллергия һәм башҡа насар тәьҫирҙәр тыуҙырмауына булышлыҡ итәсәк. Юғары иҡтисади мәктәптең Һаулыҡ һаҡлау иҡтисады институты директоры Лариса Попович әйтеүенсә, табиптар пациентты бер йүнәлештә генә дауалай, ә уның башҡа ауырыуҙары, башҡа табиптар билдәләгән дарыуҙар ҡабул итеүе бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Табипҡа дарыуҙы дөрөҫ һайларға ярҙам итеүсе был система күп илдәрҙә танылыу тапҡан. АҠШ-та хатта пациенттар был ҡоролма ярҙамында үҙенә-үҙе дауа һайлай ала. Белгестәр билдәләүенсә, был вариант Рәсәй өсөн түгел, илдә былай ҙа халыҡ үҙен-үҙе дауалау менән йыш булыша.

■ Һабында һәм башҡа гигиена саралары составындағы химик антибактериаль өҫтәмәләр ғүмер оҙайлығын ҡыҫҡарта. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, имеҙеүсе инә ҡомаҡ антибактериаль өҫтәмәләрҙең береһенә - трихлокарбан тәьҫиренә дусар ителһә, уның балаларының ғүмере ярайһы уҡ ҡыҫҡа була. Быуаҙ инә ҡомаҡтарҙы ике төркөмгә бүлеп, бер төркөмдөң аҙығына трихлокарбан өҫтәгәндәр. Уларҙың ҡанындағы был матдә 0,6 процент булған, 15 минут душ ингәндән һуң кешенең ҡанында был матдәнең күләме лә ошо һанға тиң. Химик өҫтәмә менән туҡланған ҡомаҡтарҙың ғүмер оҙайлығы кәмерәк булған. Химикат ата ҡомаҡтарҙың енси ағзалары үҫешенә лә насар йоғонто яһай.

*ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК*

**Һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙ үҙенең изге кешеләрен иҫкә төшөрә, уларҙың тормош юлын, тәжрибәһен тәрәндән өйрәнә. Был күренеш көнделдә ғәйәт һөйөндөрә, сөнки бындай шәхестәр тураһында күберәк белгән һайын, таҙарынаһың, иманға яҡынаяһың. Бөтә Үҫәргән ырыуында иң ҙур башҡорт ауылдарының береһе булған бәрәкәтле Үрген ере шулай уҡ тарихи шәхестәргә бай төбәк. Бында ил инәһе Бәндәбикә менән Ерәнсә сәсән эҙҙәре һаҡлана. Шулай уҡ Фәхретдин Аҡъюлов, Вәлиулла Ҡолдәүләтов, Сәләхетдин Абдуллин, уның улдары Нәжметдин менән Ғәбделәхәт күренекле дин әһелдәре була. Был ауылдың иң күренеклеһе Әхмәтбаҡый хәҙрәт тураһында булыр һүҙем.**



# ТУҠСАБА ОРАНЛЫ ШӘХЕС...

## Әхмәтбаҡый хәҙрәт тураһында

### Гүр эйәһе булғанында...

Көньяҡ Үҫәргән ырыуының Туҡсаба оранлы атаҡлы, олуғ шәхесе, мәшһүр дин әһеле, мәғрифәтсе, Ырымбур өлкәһенең Троицк ҡалаһындағы "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә, данлы Ҡаһирә университетында, Каруанһарайҙа, хатта Төркиәлә белем алған белемсе, ауылдың иң бай кешеһе, беренсе уҡытыусы, Әхмәтзәки Вәлидиҙең көрәштәше, бер нисә тапҡыр хаж ҡылыусы, ауылдың абруйлы муллаһы, ғәрәп, фарсы, төрөк, башҡорт, рус телдәрен яҡшы белгән, башҡорт иленең көньяҡ төбәгендә үҙ заманында тиңе булмаған халыҡ табибы ул Әхмәтбаҡый Фәхретдин. Ул Ейәнсура районының 1917 йылға тиклем Ырымбур губернаһы Йылайыр кантоны Сәлих улысына ҡараған Үрген ауылында 1860 йылда донъяға килә һәм кешелек тарихында тәрән эҙ ҡалдырып, 1936 йылда яҡты донъя менән һаубуллаша. "Минең вафатымды күктәге семәрле яҙыуҙан күрерһегеҙ", тип, йөрөгән ерендә гел әйтер булған Әхмәтбаҡый әүлиә. Ысынлап та шулай булып сыҡҡан да. Үлеренән бер көн алда ғына бөтә кешене хайран ҡалдырып, төньяҡтан көтмәгәндә ҡеүәтле ут өйөрмәһе килеп сыға һәм Бишәй урманына етәрәк ҡапыл туҡтап ҡала. Был ғәжәйеп мөғжизәне муллалар хәҙрәттең йәне ҡыйылыу менән аңлаталар. Ул вафат булған мәлдә ҡояш байыр алдынан күк йөҙөн көнбайышҡа алһыулыҡ ҡаплап ала, бөтә ер күк менән тоташып, күҙ асҡыһыҙ көслө дауыл ҡуба, шул мәлдә ҡапыл күк ҡабағы асыла һәм тирә-яҡ ауылдарҙа, әллә ҡайҙа йыраҡта йәшәүселәр ҙә күктә таныш булмаған иҫке хәрефтәргә оҡшаған ниндәйҙер үҙгәреп торған билдәләр барлыҡҡа килеүен күрә. Ғәрәпсә таныһандар "Әхмәтбаҡый әүлиә гүр эйәһе булды", тип, ап-асыҡ итеп яҙылған яҙыуҙы уҡый һәм кем бесән саба, кем иген игә, кем йортонда эшләй йәки алыҫ сәфәргә сыҡҡан - бөтә әҙәм эшен шыпа туҡтатып, Әхмәтбаҡый әүлиәне һуңғы юлға оҙатырға килә. Үрген ауылының урамына һыймай халыҡ. Өс көн, өс төн бара был матәм. Үлеменең икенсе йылында Азия тарафтарынан да килә мосолмандар, улар үҙҙәре менән дә алып килеп һәм эргәләге тауҙан да аҡтарып, ҙур-ҙур таштар менән әүлиә ҡәберен кәртәләп ҡуя. Шунынһы иғтибарҙы йәлеп итә: Әхмәтбаҡый хәҙрәт балаларына үҙенең бөтә ҡағыҙҙарын ҡәбере янына соҡор ҡаҙып күмергә ҡушҡан була...

### Зәйнуллалар юлын дауам итеүсе

Әхмәтбаҡый әүлиә дауаһының шифаһы теймәгән кешеләр бик һирәк ҡалғандыр беҙҙең тирәләрҙә. Уның ябайлығы, аҡылы, иҫ киткес илаһи ҡөҙрәте тураһындағы даны Ейәнсура ерендә генә түгел, бөтә тирә-яҡҡа тарала, Һаҡмар, Яйыҡ буйҙары ғына түгел, Ҡаҙағстан, Ырымбур, башҡа сит өлкәләрҙән кешеләр төрлө сирҙәрҙән дауаланырға килә.

Зәйнулла Рәсүлев, Ғатаулла ишандар, Мөжәүир хәҙрәт, дин ғалимы Ризаитдин Фәрхетдинов, мөфтөй Ғабдрахман Рәсүлев, мәғрифәтселәр Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мифтахетдин Аҡмулла рәтенә ҡуйырлыҡ шөһрәтле шәхестең ошоғаса тәрән өйрәнелмәүе ауылдаштарының, бөтә тирә-яҡта уны күреп-белгән, тылсымлы ҡулдары, доғалар ярҙамында үлем түшәгенән аяҡҡа баҫҡан кешеләрҙең күңелен борсой, уның тураһында һөйләнгәндәрҙең ташҡа баҫылыуын, таралыуын көтә.

Аллаһы Тәғәлә тарафынан һайлап алынған ошондай шәхесебеҙҙе күтәреп сығыу үтә лә яуаплы һәм сауаплы эш икәнлеген тәрән аңлайым, Хоҙай ризалығына ынтылам һәм ике йыл дауамында әүлиә тураһында туплаған материалдарымдың бер өлөшөн уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итмәксе булдым. Иң тәүҙә Аллаһы Тәғәләмә, илһам, дәрт биреп, йөрәк ҡушыуы буйынса башлаған изге эшемә фатиха биреүсе Ейәнсура районы Үрген ауылының муллаһы, Әхмәтбаҡый хәҙрәттең 7-се быуын туғаны Йәғәфәр Аҡъюловҡа, шулай уҡ иҫтәлектәр, һәр төрлө материалдар табышып биреүсе, әүлиә рухын тергеҙеү өсөн төрлө сығанаҡтар аша материал табышырға ярҙам ҡулы һуҙыусы аҡһаҡалдар Исмәғил Аҡъюлов, Ишмөхәмәт Аҙнабаев, Ирек Зарипов һәм Үрген мәктәбенең директоры Юлай Солтанбаев, ҡиәмәтләк һылыуым Хәмдиә Аҙнабаева, Ғәлим һәм Нәзирә Мәхийәновтар, шулай уҡ Әхмәтбаҡый әүлиә тураһында яҙырға дәрт уятып, ҡулыма ҡәләм тоттороусы рухташым яҙыусы Лира Яҡшыбаеваға һәм ижад күперен бергә төҙөшөүсе бөтә Ейәнсура халҡына сикһеҙ рәхмәтемде белдерәм һәм улар алдында оло хөрмәт менән баш эйәм.

### Шәжәрәһе шулай...

Йәштән тарих менән ҡыҙыҡһыныусан Әхмәтбаҡый хәҙрәттең туғаны Хәсән Аҡъюлов тәүбашлап үҙ нәҫеленең шәжәрәһен төҙөй һәм дәфтәрҙең ҡуш битенә яҙып ала. Ләкин, үкенескә ҡаршы, билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында был шәжәрә юғала. Бер нисә йылдан һуң Хәсән ағайҙың баш балаһы Нәҙерғәли ағай Хәкимә һәм Таһир исемле туғандары ярҙамы менән Аҡъюловтар шәжәрәһен яңынан тергеҙә. Артабан 2003 йылда Күгәрсен районы Мораҡ ауылында йәшәүсе туғандары Фәрит Харрас улы Абдуллин был шәжәрәне ҙурайтып, тулыландырып күсергәндән һуң, туғандарына таратып бирә.

Шулай итеп, Әхмәтбаҡый хәҙрәт Аҡъюловтың шәжәрә тамырын Ҡашҡар башлап ебәрә. 2-се быуында Ҡашҡарҙың Мөхәмәтйән исемле улы булһа, 3-сө быуында Мөхәмәтйәндең Аҡъюл, Аҡмәмбәт, Балғазы, Янағол, Хөсәйен исемле биш улы тора һәм Аҡъюлдан 4-се быуын Фәхретдин тыуа. Ә 5-се быуын - Фәхретдин улы Әхмәтбаҡый хәҙрәт Аҡъюлов урта

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1434 һижри йыл.***

| Июль | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16, шишәмбе | 4:02 | 4:32 | 14:30 | 21:11 | 22:41 | 00:11 |
| 17, шаршамбы | 4:04 | 4:34 | 14:30 | 21:09 | 22:39 | 00:09 |
| 18, кесе йома | 4:05 | 4:35 | 14:30 | 21:08 | 22:38 | 00:08 |
| 19, йома | 4:07 | 4:37 | 14:30 | 21:07 | 22:37 | 00:07 |
| 20, шәмбе | 4:08 | 4:38 | 14:30 | 21:05 | 22:35 | 00:05 |
| 21, йәкшәмбе | 4:10 | 4:40 | 14:30 | 21:04 | 22:34 | 00:04 |
| 22, дүшәмбе | 4:11 | 4:41 | 14:30 | 21:02 | 22:32 | 00:02 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

буйлы, йыуантыҡ ҡына яғымлы мөләйем йөҙлө, йомшаҡ һүҙле була. Әхмәтбаҡый хажиҙың атаһы Фәхретдин мулла 1890 йылда Рәсәй батшаһы ғәли йәнәптәре указы менән имам-хатиб, мөғәллим статусы ала. Әхмәтбаҡыйға 14 йәш тулғанда атаһы каруанға эйәртеп, улын Көнсығыш илдәренә төплө белем алырға оҙата. Бер нисә йылдан һуң ҙур белем алып ҡайтҡас, ул өйөнөң эргәһендә ике мәсет төҙөй, мәктәп аса һәм киң ҡолас менән аңбелем, мәғрифәт, диндә тарата башлай, ә 1890 йылда икенсе тапҡыр хажға барып ҡайтҡас, ул өйө янында мәсет төҙөй һәм ауылда муллалар әҙерләү өсөн бер юлы 60 егетте уҡытып сығара. Был мәсеттә Үргәндән генә түгел, сит ауыл кешеләре лә уҡый. Хәҙрәт ишектән атлап үткән кешенең береһен дә ҡыуып сығармаған, бөтөнләй үлем түшәгенә тәгәрәп ҡыл да ҡыбырҙатмаслыҡ хәлгә еткән кешеләрҙе бер өшкөрөүҙә аяҡҡа баҫтырған. Үҙ сиратында өйө һәр саҡ бала-сағa тауышына күмелгән, ишек алдында мөһабәт дүрт-биш йорто булған.

Әхмәтбаҡый әүлиәнең хажға барыуы уның дәрәжәһен тағы ла нығыраҡ күтәрә. Элек хажға барыу бик ауыр эш була. Сөнки нисәмә мең саҡрымдарҙы йәйәүләп, аслы-туҡлы, төрлө юл ғазаптары аша үткәндә иҫән-һау ҡайтып етә алмау осраҡтары ла булғылай. Ошо ауырлыҡтарҙы кисергәндә генә хажға барыуҙың сауабына өлгәшеп була. Ғилем алыу өсөн әүлиә ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр генә күрмәй. Быны ошолай тормош һынауҙарын тырышып-тырмашып үтә торғас, ул ауылда иң-иң изгелекле кеше булыуы менән бергә атаҡлы бай ҙа булып китә. Хәҙрәттең малы бөтә ерҙе ябып йөрөр булған. Көтөү килгән саҡта осраһаң, уның мал-тыуарының башы ҡапҡа янында булһа, икенсе осо әллә ҡайҙағы тау башында ҡала торған булған.

Үтә лә ябай, бер ҡатлы, ҡунаҡсыл һәм мәрхәмәтле Әхмәтбаҡый Аҡъюловтарҙан көнө-төнө кеше өҙөлмәгән: дауаланырға ла уның ҡапҡаһын асып ингәндәр, юлда арып, ҡунырға урыны булмаған кешеләр өсөн туҡтау урыны ла булған, ә етем-еҫер өсөн - өйләнешеп башҡа сыҡҡанға тиклем, ә ҡартҡарға - ысын донъяға күскәнсә йәшәү урынына әйләнгән был хикмәтле донъя.

### Зәки Вәлиди менән дуҫлығы

Хажи-хәҙрәттән төрлө тарафтарҙан затлы, уҡымышлы, ҙур мәртәбәле кешеләр өҙөлмәй. 1917 йылғы февраль революцияһын шатланып ҡаршы алған юлбашсыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди Темәскә китеп барышлай үҙенең хөкүмәте ағзалары менән Үргенгә килеп төшә һәм ҡымыҙ эсеп, ял итеп кенә ҡалмай, үҙенә дауа, тәненә һәм йәненә сихәт, фатиха ала, йөнсоған аттарын алмаштыра. Зәки Вәлидиҙең ҡара йылтыр аты була. Әхмәтбаҡый хәҙрәт менән бергәләп, улар ат йөҙҙөрәләр. Быны шулай, юл төшкәндә Зәки Вәлиди үҙенең командаһы менән гел генә Әхмәтбаҡый хәҙрәткә һуғылып йөрөгән. Ә 1919 йылда ул Үргенгә Шәйехзада Бабич менән бергә килә. Һуңынан Әхмәтбаҡый Аҡъюлов Зәки Вәлидигә улы Сәғитте эйәртеп ебәрә, ләкин ғәзиз улына кире әйләнеп ҡайтыу бәхете эләкмәй.

### Совет заманы ҡорбанына әйләнеүе

Үкенескә ҡаршы, үткән быуаттың егерменсе йылдары аҙағында дингә мөнәсәбәт ҡырҡа үҙгәрә башлай. Мәсеттәр емерелә, манаралар ауҙарыла, ҡайҙа ғына булмаһын, дин әһелдәренә көн күрһәтмәйҙәр. Граждандар һуғышы осоронда Үрген ауылы әллә нисә тапҡыр ҡулдан-ҡулға күскән саҡтарҙа Әхмәтбаҡый Аҡъюловты аҡтар ҙа, ҡыҙылдар ҙа талап, бик ныҡ бөлдөргән. Совет власы нығынған егерменсе йылдарҙа ураған һайын һалым, контрибуция менән йонсотҡандар. Бөтә мөлкәтен талап, йорттарын һүтеп алып бөткәндәр, ул аласыҡта ғына тороп ҡалған. Шул саҡта ла, бер нәмәһе ҡалмағанда ла Әхмәтбайый хәҙрәткә һалым өҫтөнә һалым һалалар. Тирәяҡтағы ауылдар кешеләре төндәрен йәшеренеп кенә хәҙрәткә һалым түләү өсөн үҙҙәренең малын килтерә. Колхоз тормошо башланғас, Әхмәтбаҡый әүлиәгә кешеләрҙең ярҙамы туктала, сөнки халыҡтың артыҡ малын, йорттағы кәрәк-яраҡ нәмәләрҙе колхоз-совхоздарға алып бөтәләр.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 1930 йылда ҡайғы еле Әхмәтбаҡый Аҡъюловтың ишеген ҡаға: бөтөнләй бөлгән, ауыҙын асһа, үпкәһе күренгән хажиға контрибуцияны түләмәү һылтауы менән "Халыҡ дошманы" мөһөрө тағып, өс йылға төрмәгә хөкөм итәләр. Төрмәгә алып китер алдынан ҡара плащ кейгән бәндәләр хәҙрәтте мәсхәрәләп-хурлап, уның бөтә мөлкәтен урамға сығарып ташлап, халыҡҡа таратмаҡсы итә. Ләкин кешеләр бер нәмәгә лә тотонмай. Хәҙрәт уларға сығарып ырғытҡан нәмәләрҙе алырға ҡушып, йомшаҡ ҡына итеп өндәшә. Ә теге вәхшиҙәр хәҙрәттең түбәтәйен башынан һыпырып алып, ергә бырағтыра, мыҫҡыллай һәм үҙәккә үтерлек, ҡолағың ярылырлыҡ әшәке һүҙҙәр әйтеп, түбәтәйҙе изгеләп тапай. Хәҙрәттең ғәрлегенә, йөрәк әрнеүенә сыҙамайынса, сабый бала һымаҡ илағанын иҫләп, әле лә әрней ауыл ҡарттары. Тегеләр тәһәрәт ала торған еҙ тас менән ҡомғанды алғас, ул: "Алығыҙ, алығыҙ, балалар, улай кәрәк булғас",- ти. Хәҙрәтте ғәйепләүҙә уның Әхмәтзәки Вәлиди менән күрәштәш булыуын төп сәбәп итеп алалар.

Әлбиттә, төрмә начальнигының ауырыу ҡыҙын һауыҡтырғаны өсөн Әхмәтбаҡый хәҙрәтте ваҡытынан алда сығаралар. Ләкин күңеле имгәнгән, рухы һынған, Йылайыр районы Юлдыбай ауылы урманында эшләгәндә ағас төшөп аяғын һындырған, көс еткеһеҙ ауыр эштән, ашау етмәгәнлектән хәлдән тайған Әхмәтбаҡый хәҙрәт ғүмер кисергән тупһаһына көскә ҡайтып йығыла һәм берҙән-бер торлаҡ булған бәрәс йәшәй торған аласыҡта ятып үлә...

**Нурия ХӘЛИЛОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Күмертау ҡалаһы.**
**(Дауамы бар).**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

### Хәҙерге мәктәп шарттарында шәкәргә ҡаршы тороу тәжрибәһе

Тәрбиәләнеүселәрем шәкәр һәм составында шәкәр булған аҙыҡ-түлек ҡулланыуҙы минимумға тиклем кәметһен өсөн үҙем мөрәжәғәт иткән ысулдарға туҡталмаҡсымын. Тормошомдоң ошо этабына тиклем мин бик оҙаҡ: "Ни өсөн кешелектең барлыҡ бәкилдәре лә тиерлек араҡыға йәки шарапҡа ылыға?" - тигән һорауға яуап эҙләнем. Уның сәбәптәренең береһен таптым - ит, бигерәк тә һөтимәрҙәрҙең итен ашау. Ит, балыҡ һәм йомортҡа ашауҙан баш тартыуыма биш йыл булғас, кешене йәш ваҡытында үлемгә илтеүсе тағы бер сәбәп булыуын аңланым. Күп кенә тиңдәштәрем 20-25 йәштә яҡты донъя менән хушлаша башланы. Нигеҙҙә, эскелек арҡаһында. Уларҙың бер өлөшөнөң йәше утыҙҙан үткәс, йәшәүгә ҡарағанда үлемде өҫтөнөрәк күрҙе - үҙ-үҙенә ҡул һалды. 45-55 йәштә билдәләп үтелгән сәбәптәргә тағы берәү өҫтәлде - күптәр яман шештән, йөрәк ауырыуҙарынан һәм инсульттан вафат булды. Иң аптыратҡаны шул: үлем барыһын да - яҙыусылар һәм колхозсылар, етәкселәр һәм ер ҡаҙыусылар, уҡытыусылар һәм водителдәрҙе берҙәй тигеҙ ҡырҙы. Үлемгә юл алғанда белем һәм мәҙәниәт кимәле кәртә булып торманы. Был шундай һығымтаға этәрҙе: беҙ барыбыҙ ҙа бер күҙгә күренмәҫ сиргә буйһонабыҙ. Мин шуны аңланым: ҡайһы бер зыянһыҙ күренгән аҙыҡ-түлек - торттар, печеньелар, кәнфиттәр, туңдырма һәм төрлө төҫкә буялған эсемлектәр кешене психик яҡтан тоторокһоҙландыра, ауырыу йәки эскесе яһай. Ул ваҡытта мин быларҙың барыһына ла шәкәр - кеше үҙе уйлап тапҡан һәм үҙе уҡ ҡулланған, йылап тәьҫир итеүсе ағыу ғәйепле икәнлеген аңламай инем әле.

Шуға ҡарамаҫтан, атап үтелгән аҙыҡ-түлеккә ҡаршы ныҡлы көрәш башланым. Беренсе ата-әсәләр йыйылышында "тере" һәм "үле" аҙыҡ-түлек исемлеге менән таныштырҙым һәм ҡыҫҡаса ғына телмәр тоттом. Балаларға шул уҡ мәғлүмәтте улар аңлаған телдә һөйләнем. Төшкө аштан һуң балаларға алма, груша, әфлисун йәки теләһә ниндәй башҡа емеш килтерергә тәҡдим ителде. Улар булмағанда инде кишер, кәбеҫтә киҫәге, шалҡан йәки бешкән сөгөлдөр килтерергә мөмкин ине. Кәнфит, печенье, "Сникерс"тар һәм "Марс" тар килтереү ҡәтғи тыйылды. Баланың тыуған көнөндә ата-әсәләр балалар һаны иҫәбендә алма, груша, әфлисун йәки башҡа емеш килтерҙе.

Бер йылдан ата-әсәләргә ҡәтғи шарт ҡуйҙым: әгәр минең талаптарға буйһонмайһығыҙ икән, балағыҙ минең синыфта уҡымаясаҡ. Талабымды шундай һүҙҙәр менән нигеҙләнем: "Мин 25 йәшендә эскесегә әйләнәсәк йәки саҡ ҡына һуңыраҡ үләсәк кеше өсөн тырышырға теләмәйем. Һеҙгә лә, миңә лә ныҡлы ғаилә ҡорорлоҡ, кәмендә дүрт бала тәрбиәләп үҫтерерлек һәм уларға матур тәрбиә бирерлек сәләмәт кешеләр кәрәк. Дөрөҫөн әйткәндә, мин һеҙҙең балаларығыҙҙы түгел, ә тыуасаҡ ейәндәрегеҙҙе хәстәрләйем". Ата-әсәләр аңлы булып сыҡты: улар барыһы ла минең башланғысымды хупланы. Беренсе синыфтың икенсе яртыһында уҡ балалар мәктәпкә тәм-том килтереүҙән туҡтатты.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Беренсе көн

**Беренсе бүлек. Аҡыл. Маҡсаттар ҡуйыу буйынса семинар**

Бөгөн -тормошоғоҙҙоң яңы өлөшөнөң беренсе көнө. Тап бөгөн һеҙ был эште 20 йәки 30 йылға ҡалдырмайынса, бынан 20 йәки 30 йыл үткәс кем булырға тейешлегегеҙгә әҙерлек башлайһығыҙ. Алдағы мәғлүмәттәрҙән мейегеҙҙең ниндәй ҡеүәткә эйә икәнлеген аңланығыҙ һәм, әгәр теләгегеҙ булһа, барлыҡ тормошоғоҙҙо бер мәл эсендә тамырынан үҙгәртеүҙең сикһеҙ көсөнә ышанығыҙ. Бөгөн, ниһайәт, яҡшы көндәргә тип һаҡлаған ошо үҙгәрештәрҙе тормошҡа ашырасаҡһығыҙ. Хыялығыҙ буйынса йәшәй башлағыҙ һәм үҙегеҙгә яңы яҙмыш - алдағы 30 көнгә маҡсаттарығыҙҙың исемлеген төҙөгөҙ.

Был исемлектә һәр көн кәм тигәндә өс тапҡыр уҡып сығығыҙ, уҡыған ваҡытта уларға өлгәшеүҙең аныҡ датаһын күҙаллап, көслө теләк белдерегеҙ. Үҙегеҙҙе ышандырыу көсөнә үткәндәге күпселек уңышлы тормош тарихтары өҫтөндә эшләгән кеүек эшләү мөмкинлеге бирегеҙ. Хәҙер инде үҙегеҙҙә ошо яҡшырыуҙы тойғас, маҡсатығыҙға өлгәшкәс кисерәсәк ауырыуһыҙ тойғоһо хаҡында уйлағыҙ - һеҙ ысынлап та ошо ауыртыныуҙы күрергә һәм тойорға тейешһегеҙ. Ниһайәт, ҡуйылған маҡсаттарығыҙға өлгәшкәс кисерәсәк һәм тоясаҡ шатлыҡ, ләззәт хаҡында уйлағыҙ. Тупланған юғары иғтибар, аҡыл, үҙүҙеңә артҡан ышаныс тормошоғоҙҙо яҡшыртасаҡ. Мотлаҡ көн һайын ҡағыҙға теркәгән маҡсаттарығыҙҙы һәр көн бер нисә секунд дауамында булһа ла ҡат-ҡат уҡығыҙ.

**Икенсе бүлек: Тән**

Бөгөн - һеҙҙең яңы физик ысынбарлығығыҙҙың беренсе көнө. Ҡалған 29 көндә тәнегеҙҙе һәм унда барған процестарҙы оптималь торошҡа килтерәсәк серҙәр менән танышасаҡһығыҙ. Һеҙ уны ошо маҡсатта күнектерәсәкһегеҙ. Физик камиллыҡ юлына рәхим итегеҙ!

**Өсөнсө бүлек: Характер**

Бер ай эсендә характерығыҙҙың ниндәй биш иң мөһим сифатын яҡшыртырға теләйһегеҙ - яҙығыҙ. Уларҙың үҙегеҙ өсөн мөһимлеген билдәләгеҙ һәм йөконан уяныу менән һәм йоҡлар алдынан уларҙы 29 көн дауамында ҡысҡырып ҡабатлағыҙ.

### Икенсе көн

**Беренсе бүлек. Аҡыл. Иғтибар туплау көсө**

Оҙайлы ваҡыт арауығында иғтибар туплау һәләте һәм уйҙарыңды бер маҡсатҡа йәки бурысҡа йүнәлтеү һәм туплау һәләтен үҫтермәй тороп, тормошта ысын үҫешкә һәм оҙайлы ҡаҙаныштарға өлгәшеү мөмкин түгел. Иғтибарыңды туплау һәләте шулай уҡ аңдың тынысылығына илтә һәм ул бер ниндәй кире фекергә бирешмәй. Рух тынысылығы тәндең сәләмәтлегенә килтерә, сөнки ул беҙҙең уйҙарыбыҙҙан тыуа. Киләһе һанда программаның ҡалған көндәрендә көнөнә кәм тигәндә 15 минут башҡарырға кәрәкле иғтибар туплау күнекмәһен бирербеҙ.

**Робин ШАРМА.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ТЫУҒАН ЯҒЫМ ИШЕМБАЙ...



**Горизонталь буйынса:** 1. Ат тубығының эс яғындағы ҡаты сөйәл. 11. Белем. 12. Йәшелсә ултыртыу өсөн әҙерләнгән ер. 13. "Эт күҙе (...) белмәҫ", тип һөмһөҙ кешегә әйтәләр. 14. Линолеум төргәге. 15. Польшаның пайтәхете. 18. Йөрәк-ҡан тамыры һәм быуын ауырыуы. 28. Алма кеүегерәк емеш биргән үрмәле урман үләне. 29. "Көсләп асҡан күҙҙең (...)ы юҡ". 33. Ишембай районындағы етәксе кадрҙар тәрбиәләгән ғаилә фамилияһы. 34. Йонсоу, ябыҡ ат. 35. Тәпәндән бейегерәк ағас һауыт. 36. Ҡарбуз балы. 37. "Ҡаҙ ҡанаты (...) яҙыр". Кеше өҫтөнә яғылған ялған ғәйет. 42. В. Путин көрәшкән keләм. 45. СССР-ҙың икенсе Баҡыһы. 50. Яҙғы сәскә. 55. Шотланд овчаркаһы. 56. Ерәнсә (...). 57. Ишек алды. 58. "Ҡыҙыл төҫ"лө ир-ат исеме. 59. Ноғман Мусиндың тыуған ауылы. 60. Әтәс менән тауыҡ төйлөгәнде һыйлаған орлоҡ. 61. Ҡасаҡтар ауылы.

**Вертикаль буйынса:** 4. Суғырмаҡ тәнле баҡа. 5. Һаҡлыҡ, абайлыҡ. 7. Түбә таҡтаһы аҫтынан өйҙө уратып элгән тар ғына шаршау. 9. Йәмғиәттең иң яҡшы, өлгөлө вәкилдәре. 10. Яҙмалы мәрмәр таҡта, плитә. 16. Майлы үҫемлек. 17. Манаранан әйткән доға. 20. Башҡорттоң ут күршеһе. 22. Иран аҡсаһы. 23. Йән тыныслығы. 25. Спелеолог күргән боҙбармаҡ. 27. Математиканың төп өлөшө. 28. Судта прокурорҙың оппоненты. 30. Исламдағы байрам. 32. Төркиә күле. 33. Ил алдындағы абруй. 37. Елән һымаҡ өҫ кейеме. 38. (...) күп төшһә, емеш уңыр. 40. Ҡыҫҡартылған дефис. 41. "Рено" логотибы. 43. "Яусы менән (...) ялғанһыҙ булмаҫ". 44 өн, тауыш. 45. Берләшмә, ойошма. 46. Сүкеш менән һатыу урыны. 48. Ҡағыҙ сәнғәте. 49. Күңел аҙҙырғыс нәмә. 51. Битәрләп, әрләп әйткән һүҙ. 53. Быяла ҡырҡҡыс. 54. Быума йүтәл.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**21-се һандағы сканвордтың еңеүсеһе Әлшәй районы Ҡармыш ауылынан Зәңгиҙә Сәлимованы редакцияла бүләк көтә.**

**27-се һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 1. Хызыров. 3. Ишбулатов. 6.Скрепер. 11. Иваси. 12. Нерон. 13. Ахилл. 14. Быҙау. 15. Ванилин. 15. Сценарист. 21. Усманов. 26. Орбита. 28. Каштан. 29. Тас. 31. Сапсан. 33. Вәлиев. 34. Урата. 35. Ранжир. 36. Нигрол. 37. Зат. 39. Олбани. 42. Ректор. 45. Сафсата. 47. Принцесса. 50. Ткемали. 55. Атолл. 56. Парик. 57. Томат. 58. Анкер. 59. Темпера. 60. Шаһыбалов. 61. Камалов.

**Вертикаль буйынса:** 1. Хәкимов. 2. Оригами. 4. Штирлиц. 5.Омнибус. 7. Конкурс. 8.Рәжәпов. 9. Сафин. 10. Ураҙа. 16. Нимб. 17. Лифт. 19. Ноҡот. 20. Ребус. 22. Маҙа. 23. Ниәт. 24. Ноғоманов. 25. Интроверт. 27. Ассорти. 28. Кавалер. 30. Алаша. 32. Нур. 33. Ван. 37. Задин. 38. Терпе. 40. Блеф. 41. Нужа. 43. Елпе. 44. Тана. 45. Салауат. 46. Трактор. 48.Рулетка. 49. Сопрано. 51. Кокарда. 52. Илһамов. 53. Ҡойма. 54. Арека.

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

## МАЙҘАНДАР ТУРАҺЫНДА

● Бар донъяға билдәле Ниагара шарлауығын иң ҙуры тип уйлайһығыҙмы? Юҡ шул. Мәҫәлән, Бразилиялағы Игуасу шарлауығы Ниагаранан 20 метрға бейегерәк һәм дүрт тапҡырға киңерәк. Үәт!

● Американың Айова штаты Португалиянан ҙурыраҡ.

● Японияның бар майҙаны (халҡы 127 миллион) Американың Калифорния штатынан (халҡы 34 миллион) бәләкәйерәк.

● Израиль майҙаны һәм халҡының һаны буйынса яҡынса Американың Массачусетс штатына тиң.

● Бөйөк Британияның дөйөм майҙаны Американың Орегон штатынан бәләкәйерәк.

● Халыҡ-ара Даллас аэропорты майҙаны Манхеттен утрауынан ҙурыраҡ.

● Амазонка йылғаһы бассейнында 13 Франция "һыя".

● Сыңғыҙхан бер үҙе яулап алған территориялар майҙаны Александр Македонский, Наполеон Бонапарт һәм Гитлер бергә яулаған майҙандарҙан күберәк.

● Бостонда һәм Яңы Англияла (АҠШ) Ирландияға ҡарағанда күберәк ирландтар йәшәй.

*ДАРЫУХАНА*

# БӘҒӘНӘШ



**Был дарыу үләненә көтмәгәндә тап булдым. Йәй башланған мәл ине. Трамвайҙа осраған ғалим-шағир Вафа Әхмәҙиев (хәҙер мәрхүм инде): "Әйҙә, бәғәнәш үләнен күрһәтәм. Өфө урмандарында ла үҫә ул. Хәҙер сәскә атҡандыр инде", - тип мине ҡала Советы туҡталышына алып барҙы.**

Мәжит Ғафури исемендәге ял паркы миллиондан ашыу халҡы булған ҙур ҡаланың уртаһында урынлашһа ла, үҙенең тәбиғилеген һаҡлай әле. Йөҙйәшәр имәндәр, һылыу йүкәләр, күркәм сағандар менән бергә айыу баланы, зелпе ҡыуаҡтары бында йырып үткеһеҙ булып үҫә. Яҙ килеү менән, кәкүк емеше, тайтояҡ, яҙ күрке аҡ умырзая, дарыу үләндәренән сөйәл үләне, юл япраҡтарының бер нисә төрө, ҡырҡколас кеүек иртә сәскә атыусы үҫемлектәр ҡалҡып сыға.

Сирек сәғәт самаһы ваҡыт үтеүгә, бәғәнәште үҙенә хас үҫемлектәр берлегендә - ҡатнаш урманда, ҡарағай, акация һәм айыу баланы ҡыуаҡтары күләгәһендә осраттыҡ. Русса "воронец колосовидный" тип атала ул. Аҙаҡ шағир бәғәнәш үләненең Ишембай, Күгәрсен, Ғафури райондарында күпләп үҫеүе һәм урындағы халыҡҡа яҡшы таныш булыуы тураһында һөйләне. Уның икенсе исеме "Салауат тамыры" икәнен дә хәтергә төшөрҙө.

Бәғәнәш, әйтеп үтелгәнсә, шыршы, ҡарағай урмандарында үҫә. Ҡатнаш урмандарҙа ла осрай. Ул үҫкән тирәлә ваҡ ҡымыҙлыҡ, ҡырҡбыуын, ҡаҙаяҡ үләндәре үҫеүсән. Бәғәнәштең бейеклеге 30-40 сантиметр. Япраҡтары киң, овал (эллипс) формаһында, бер-береһенә ҡапма-ҡаршылаш урынлашҡан. Япраҡ һабы тирәһендә улар тарайып бәләкәйләнә. Яҙ көнө аҡ сәскә ата, емеше ҡара төҫтә. Ҡыҙыл емешлеләре лә бар. Улары "воронец красноплодный" тип атала. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: был үҫемлектең орлоғо тупраҡта ике ҡыш ятҡас ҡына шытым бирә. Беренсе йыл үҫенте тик бүлбеләргә оҡшаған һурыусы һәм һаҡлыҡ тамырҙарын ғына барлыҡҡа килтерә. Июль айҙарында орлоҡ өлөштәре кибеп һәләк була һәм үҫенте ҡышҡылыҡҡа бүлбеләр рәүешендә китә. Икенсе яҙға үҫемлек тәүге япраҡтар барлыҡҡа килтерә.

Бәғәнәш һуңғы йылдарҙа күп ғалимдарҙың, бигерәк тә фармацевтика өлкәһендә эшләүселәрҙең, иғтибарын йәлеп итә. Хәҙер был үләндән күп төрлө дарыу эшләү мөмкинлектәре асыҡланды.

Әйтергә кәрәк, бәғәнәш, аҙ-аҙлап осрай. Шуға күрә уны тәләфләргә ярамай. Билдәле булыуынса, ул ағыулы үҫемлектәр исемлегенә инә һәм уның менән эш иткәндә мотлаҡ һаҡлыҡ сараларын иҫәпкә алырға кәрәк.

**Был ҡыҙыҡлы.** Иң ҙур япраҡлы үҫемлектәрҙең береһе - Амазонка викторияһы. Уның диаметры 2 метр, хатта унан да ашып китә. Уның ситтәре өҫкә ҡайтарып бөрөлгән, һыу өҫтөндә ҙур бер табаҡ кеүек йөҙөп йөрөй. Япраҡтарының ҙурлығы күҙәнәктәренең күплеге иҫәбенә түгел, ә ҙурлығы иҫәбенә икән. Был япраҡты һыуға батырыу өсөн ярайһы ғына көс кәрәк. Япраҡтың һыу өҫтөндәге был ныҡлығы япраҡ һеңерсәләренең үҙенсәлекле булып ишелеп урынлашыуында - улар япраҡ йөҙөнән 3-5 сантиметр өҫкә ҡалҡып тора. Был һеңерсәләр үҙенә күрә төҙөлөштә ҡулланылған балкаларҙы хәтерләтә. Үткән быуатта ошо япраҡ һеңерсәләренең урынлашыуына оҡшатып эшләнгән Лондондағы вокзал һәм күргәҙмәләр залы һаман да үҙенең ныҡлығы менән белгестәрҙе һәм йәмәғәтселекте хайран итә.

**Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН, биология фәндәре докторы.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БАЯЗИТ БИКБАЙҒА АРНАП...

**"Башҡортостан" киностудияһында "Тере шишмә" тип аталған документаль фильм төшөрөлдө. Ул билдәле башҡорт шағиры, драматургы, прозаигы, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Баязит Бикбайҙың тормош юлы һәм ижадына арналған.**



Зөһрә Бураҡаева яҙған сценарий буйынса төшөрөлгән был фильмдың режиссеры Вилүрә Иҫәндәүләтова. Яҙыусының образын Рәсәйҙең атҡаҙанған, БР-ҙың халыҡ артисы Олег Ханов һынландыра. "Тере шишмә" документаль фильмында Башҡортостан телевидениеһы һәм радиоһы, Ә.З. Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы, Көйөргәҙе районы Мораптал мәктәбе, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры музейҙарының, БР-ҙың Үҙәк йәмәғәт берекмәләре дәүләт архивының һәм яҙыусының ҡыҙы Элиза Баязит ҡыҙы Бикбаеваның шәхси архивынан материалдар ҡулланылған.

Фильмдың премьераһы көҙ яҙыусының тыуған яғында - Көйөргәҙе районында күрһәтеләсәк.

# БЕЙЕП ЯРЫША БАЛАЛАР...



**"Балалар Байығы - 2013" Республика башҡорт бейеүен башҡарыусылар конкурсының Гала-концерты быйыл 20 июлдә Күгәрсен районы Моразым тарлауығында үтәсәк.**

Башҡортостан Республикаһы Президенты призына 3 йәштән 15 йәшкә тиклемге балалар араһында ойошторолған был бәйге йылдан-йыл киң танылыу яулай бара. Башҡорт бейеүен һаҡлау, уны таратыу, балалар араһында хореографик сәнғәтте популярлаштырыу, халыҡ бейеүе йолаларын үҫтереү маҡсатында үткәрелгән был бәйгелә быйыл да сит ҡитғаларҙан ҡунаҡтар ҡатнашыуы көтөлә. Конкурс ике йәш категорияһында (3-10 йәш һәм 10-15 йәш) һәм соло, дуэт, трио, ансамбль номинациялары буйынса баһаланасаҡ.

# "БӨЙӨК ДАЛА" ФЕСТИВАЛЕ

**Хәйбулла районында үткән "Бөйөк дала" II Асыҡ Республика башҡорт рок-фестивале быйыл үҙенең майҙанына 2 мең ярым тамашасы йыйҙы.**




Үткән быуатың 90-сы йылдарында, милли үҙаң тулҡынында барлыҡҡа килгән башҡорт рок-хәрәкәте йәштәргә көслө йоғонто яһап, илдәге сәйәси көрсөк шарттарында рухи йүнәлеш тә булып торғайны. Тап ошо еңел булмаған йылдарҙа "Дәрүиш", "Рух", "Ант", "Каруанһарай" кеүек төркөмдәрҙең йырҙары күптәргә көс биреп кенә ҡалманы, киләсәккә өмөт менән ҡарарға ла булышлыҡ итте. Был йүнәлеш башҡа милләт телдәрендә яңғыраған роктан шунһы менән дә айырыла - башҡорт рогы бай халыҡ ижады менән бәйле.

Аҡъярҙа үткән фестивалдә "Рух" халыҡ вокаль-инструменталь ансамбле төркөмә асты. Концертта Хәйбулла районының "Аҡъяр", "Экстрим", "Звезда", "Индивит", "Глинтвейн" командаларынан тыш, Өфөнән "Бүреләр" һәм "Дәүер", Сибайҙан "Приятели" һәм "Черный дракон", Салауат районынан "Юлдаш", Баймаҡ ҡалаһынан "Амурҙар", Силәбе өлкәһенән "Криминальное чтиво" төркөмдәре сығыш яһаны. Шулай уҡ Ҡаҙағстан республикаһынан Нурлан Кажиев менән Асет Сатаев, Хәйбулланан Илүзә Ҡоҙаярова, Рафаэль Ҡоҙаяров менән Надир Әбделмәновтың сығыштары тамашасыға бик оҡшаны. Ырымбур өлкәһенең Гай ҡалаһында урынлашҡан "Fenrir MG" мотоклубы байкерҙары сығышы программаға шоу элементтары өҫтәне.

**Ләйлә ИШМОРАТОВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ТӘСӘЛЛӘНМӘ, АЛАБАЙТАН!

**Әсәйем Байғужина Тәйрә Хәйбулла районының Аҡназар ауылында йәшәй. Уның үҙ лөғәтендә ҡулланған ҡайһы бер һүҙҙәрҙе һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәм:**

**Инне** - ҙур. Был һүҙ, бәлки, инде ҙур, йәғни бигерәк ҙур тигәндән килеп сыҡҡандыр.

**Таҡа** - әйтәйек, был бала таҡа ашамай. Ҡайһы бер һөйләштәрҙә таҡа-тоҡа - аҙ мәғәнәһен аңлата.

**Аухайна** -иғтибарһыҙ.

**Шаймашай** - төркөмгә, кампанияға тиҙ генә ылығып китеүсе кешегә ҡарата әйтелә.

**Алабайтан** - ике йөҙлө.

**Тәсәлләнеү** - бөтәйеү. Мәсәлән, мине ҡыйырһытып күңелен тәсәлләндеме, бөтәйҙеме?

**Ырыкта** - йонсоу малға ҡарата әйтелә.

**Бәйнәт** - ялҡытҡыс кеше, нәмә.

**Ҡупҡалыйыу** - ҡаңғырыу, борсолоу. Мәсәлән, бушҡа-юҡҡа ҡупҡалыйыны ла киттесе.

**Отоpo** - ҡаты, тупаҫ һөйләшеү.

**Ауыр түләк** - йыуаш, баҫалҡы, яй ҡуҙғалыусы кеше.

**Гөлсинә ЙОСОПОВА.**

ЯҢЫ КИТАП

# "ИЗГЕ ДОҒАЛАР"

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте башҡорт телендә "Изге доғалар" китабын баҫтырып сығарҙы. Төҙөүсеһе - Фирҙәүсә Биктәшева.**




Был баҫмала төрлө ваҡыттарҙа уҡыла торған доғалар тупланды. Доға кешенең ғүмер буйына таяна торған изге терәге. Һәр иманлы кешегә доғаларҙы ятлап, уҡып йөрөү изге ғибәҙәттер. Сөнки доға - ғибәҙәттең төп нигеҙе. Китап изге ҡулланма булып, уҡыусыларыбыҙҙың күңел кәштәләрендә үҙ урынын алыр, тип ышанабыҙ.

3000 дана менән донъя күргән баҫманы нәшриәттең фирма магазиндарында һатып алырға мөмкин.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЯҘ КӨНДӨҢ...

## йәшененән ҡурҡ

Башың диуанаға ҡалһа, бағанаға сәләм бирерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешенең аҡылы һәм холҡо тураһында ул уҡыған китаптарға һәм дуҫтарына ҡарап фекер ит.

**(Гельвеций).**

Беҙҙе бер кем дә аңламаҫлыҡ итеп түгел, ә һәр кем аңлаһын тип тырышырға кәрәк.

**(Публий Марон).**

Һәр төрлө машина иллеләп яһай кеше башҡара торғанды ғәмәлгә ашыра ала. Әммә күренекле, бөйөк кеше башҡарғанды бер генә машина ла ғәмәлгә ашыра алмай.

**(Генри Форд).**

Беҙҙең йәнәшәлә йәшәй-йәшәй хайуандар ҡулға эйәләшә, ә кешеләр бер-береһе менән аралаша-аралаша хайуанға әйләнә.

**(Гераклит).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт аҡыллы, белемле Вэнь-Чжи исемле халыҡ табибына атаҡлы нәҫелдән сыҡҡан түрә, императорҙың туғаны, сәйер, таныш булмаған ауырыуҙан дауалауын һорап мөрәжәғәт итә.**

**- Ниндәй сир борсой, һөйләп ебәр, - тип һорай унан Вэнь-Чжи.**

**- Йөрәгемдә сәйер һалҡынлыҡ урын алды, - тип яуап ҡайтара түрә. Маҡтауҙарҙы - данлау, хурлауҙарҙы оятҡа ҡалыу тиеп һанамайым. Уңыш ҡаҙаныуҙарҙан шатлыҡ кисермәйем, юғалтыуҙарҙан төшөнкөлөккә бирелмәйем. Йәшәүгә үлемгә ҡараған кеүек ҡарайым. Байлыҡҡа ҡарашым фәҡирлеккә ҡарашыма тиң. Үҙем һәм башҡалар араһында айырма күрмәйем. Дәрәжә һәм бүләктәргә аптырып бармайым, яҙаға тартылырыу ҙа мине ҡурҡытмай. Яҡшы саҡта ла, насар саҡта ла фекерҙәрем, уйҙарым үҙгәрмәй, үҙемдә бер килеш тотам. Табыштар шатландырмай, ҡазалар кәйефемде ҡырмай. Ҡуптән инде ҡыуаныстар ҙа, ҡайғылар ҙа мине тулҡынландырмай. Байлыҡ-муллыҡ тулы үҙ өйөмдә йәшәһәм дә, ниндәйҙер сит ҡунаҡханала йәшәгәндәй тоям үҙемде. Был сәйер ауырыу миңә батшабыҙға элекке һымаҡ бирелеп хеҙмәт итергә, тыуғандарым һәм дуҫтарым менән аралашырға, ҡатыным һәм балаларым менән идара итергә, хеҙмәтселәремә бойорорға ҡамасаулай. Һин йәндәрҙе дауалау серенә эйәһең - мине дауала, зинһар...**

**- Яҡтыға арҡаң менән әйләнеп тор, - тигән бағымсы. - Йөрәгеңде үтә күрәм. Ҡайһылай ҙур! Уның урыны - йөҙрөк самаһындай, аҡыл эйәләренеке кеүек еңел һәм буш. Йөрәгеңдә алты канал асыҡ, ә етенсеһе ябылған. Шуғалыр ҙа, һин аҡыллы булыуҙы сир тип һанайһың. Күктәр белә, бындай сиргә миндә дауа юҡ..."**

158221891006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 2644